ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

15-21 ноябрь (ҡырпағай) 2024

№45 (1138)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Әгәр ҙә һин маҡсатыңа табан китеп бараһың һәм һәр юл сатында һиңә ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәргә таш бәрергә туҡталаһың икән, ул саҡта һин маҡсатыңа барып етә алмаясаҡһың.*

*(Ф. Достоевский).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Дәүләт бурысы ла ул - тыуған телдәрҙе һаҡлау




2

Ҡәләм осонан... йөрәк осорған шағир һүҙе



8-9

Фәйзи Ғәскәров ансамбле... яҡтылыҡ тарата белә!



11

Мунсалы ла булдылар



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ӨЙГӘ НУР ТУЛА ЛА ҠУЯ

**Заманында гәзит халыҡ өсөн сәйәсәт, иҡтисад, спорт, сәнғәт, сауҙа һәм башҡа өлкәләр тураһында мәғлүмәт еткереүсе төп сығанаҡ булды. Нәҡ ваҡытлы матбуғат аша беҙ ил сиктәрендә генә түгел, ә тотош донъяла барған хәл-ваҡиғаларҙы күҙәтеп, уҡып, белеп барҙыҡ. Ә ҡалын-ҡалын журналдарҙа баҫылған хикәйә, шиғыр һәм романдарҙы нисек көтөп алғаныбыҙҙы үҙебеҙ генә беләбеҙ. Ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыу ғәҙәти күренеш булды.**




*Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ.*

Әлеге ваҡытта интернет ҡағыҙ баҫмаларҙы алыштырырға тырышып ҡарай ҙа, хәленән килмәй тегенең. Һәм килмәҫ тә, сөнки ҡағыҙға баҫылғанды тотоп уҡыу беҙҙең булмышҡа әйләнгән. Бәләкәй генә экранға текәлеп ултырғанса, ҡағыҙ гәзитте шытырҙатып уҡыйым мин. Балаларға ла ошо ғәҙәтте һеңдереп үҫтерҙек аталары менән, улар ҙа өйҙәренә 5-6 баҫма алдыра.

Башҡортостанда баҫылған гәзит-журналдар араһында айырыуса күңелемә ятҡандарҙан "Киске Өфө"нө билдәләп үткем килә. Был ыҡсым, йәшәйешебеҙҙәге күп төрлө өлкәне яҡтыртҡан гәзит бөтә ғаилә, төрлө быуын вәкилдәре өсөн дә ҡыҙыҡлы. "Киске Өфө" килһә, өйгә ниндәйҙер нур тулған кеүек була, күңелдәр күтәрелеп китә.

Уның биттәрендә баҫылған мәҡәләләр кешене ыңғайға көйләүе менән баһалы минең өсөн. Ниндәй генә ваҡиға, кеше тураһында яҙмаһындар, уларҙың барыһы ла ниндәйҙер позитив тулҡынға көйләнгән, күңелгә ял бирә, рух өҫтәй. Бигерәк тә сәнғәт өлкәһенә ҡағылышлы мәҡәләләр, күренекле шәхестәр менән күләмле әңгәмәләр, яңынан-яңы хикәйәләр илһам бирә.

Донъяла барған хәлдәрҙе барыбыҙ ҙа күҙәтеп барабыҙ. Кемдер уларға күҙ генә һалып үтә, икенселәр төпкә тиклем төшөп аңларға тырыша, анализлай, фекер төйнәй, башҡалар менән фекер алыша. "Киске Өфө"лә Фәүзиә Мөхәмәтшинаның "Донъя шаңдауы" аҫтында яҙғандарын көтөп алам, йотлоғоп уҡыйым. Аңлайышлы, ябай тел менән яҙыуы, төрлө мөһим ваҡиғаны ипле генә итеп биреүе, үҙенең фекерен көсләп тағырға тырышмауы оҡшай.

Йәшерен-батырыны юҡ, йәштәрҙе әрләргә генә торабыҙ бит инде ул беҙ, оло быуын кешеләре. Йәнәһе, телефондан, компьютерҙан бушамайҙар, китап уҡымайҙар һәм башҡалар. Ә бына "Киске Өфө"нө уҡығандар был фекер менән бөтөнләй килешмәйәсәк, сөнки гәзит үҙенең биттәрендә рухлы, маҡсатлы, ҡыйыу, донъя кимәлендә ҙур уңыштарға өлгәшкән йәштәребеҙ тураһында күп яҙа. Һәр кемде, бигерәк тә йәштәрҙе, ваҡытында күреп-баһалап, күтәрмәләп тороу мөһим шул. Бындай иғтибар уларға ҡанат ҡуя, башҡарған эштәренең мөһимлеген арттыра.

Тағы ла "Киске Өфө" йәш һөнәр эйәләре тураһында ла күп яҙа. Ҡайҙа йәшлек - унда көсдарман, ынтылыш, энергия. Дипломлы йәш белгестәргә лә төрлө яҡлап ныҡлы терәктең булыуы ҡамасауламай. Уларҙың алған белемдәрен ғәмәлдә ҡуллана башлауҙарының тәүге аҙымдарын яҡтыртыу әһәмиәтле ваҡиға бит. Шул яҡтан "Киске Өфө"ләр күптәрҙең танауына сиртә.

**Әминә БИЛАЛОВА.**
**Иглин районы.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ ТУРАҺЫНДА

**Өфөлә Башҡортостандың төп символы Салауат Юлаевтың һәйкәлен реставрацияларға әҙерләнәләр. Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына - ошо эштәргә ҡағылышлы 6 төп һорауға яуап шундай:**



## Һәйкәлгә нимә булған?

Европалағы иң ҙур атлы һәйкәл, 1967 йылда скульптор Сосланбәк Тавасиев эшләгән монумент, яҡынса 40 тонна ауырлыҡтағы 10 метрлыҡ суйын атлы статуянан ғибәрәт. Реставрация проекты икеләтә тарихи-мәҙәни экспертизаны уңышлы үтте. Быйыл октябрҙә Башҡортостан мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау буйынса эште үткәреүгә документацияның дәүләт тарихи-мәҙәни экспертизаһы һөҙөмтәләре буйынса акт баҫтырып сығарҙы. Документацияны Ҡаҙандың "ТСНРУ" акционерҙар йәмғиәте эшләне, экспертизаны Санкт-Петербургтың "С.П.Бург һәм партнерҙар" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте хеҙмәткәрҙәре үткәрҙе. Уларҙан күренеүенсә, монумент авария хәлендә һәм реставрацияға мохтаж. Скульптурала ҡойоу элементтарының айырылыуы күҙәтелә, һөҙөмтәлә металл ярыҡтары һәм коррозия барлыҡҡа килгән. Постаменттың үҙендә лә ярылған урындар бар. Ҡурған ситтәре лә ултырған.

Шулай итеп, һыбайлы скульптураһы ғына түгел, ә йыл һайын йылға яғына шыуышҡан һәйкәл һәм хатта нигеҙе лә ремонт талап итә. Ремонттың оҙаҡҡа һуҙылыуы һәйкәлдең емерелеү хәүефе менән янай.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

*БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ*

# ҮҘ ИТТЕМ, ЯРАТТЫМ...



**Өфөбөҙҙөң 450 йыллыҡ юбилейы айҡанлы бик күп билдәле шәхестәр матур мәҙәни саралар бүләк итте. Шулар араһында Башҡортостандың Милли музейында үткән ташҡа контррельефлы гравюраның һирәк техникаһында эшләнгән һәм артабан металға ҡойолған эштәрҙән торған күргәҙмә үҙе ҙур ваҡиға булды. Күргәҙмәнең авторы - был технология буйынса эшләүсе Рәсәйҙәге берҙән-бер рәссам-гравер Владимир Нуждин.**

Рәссам Башҡортостан өсөн Шайморатов генерал миҙалы һәм ордены, Григорий Аксаков ордены, "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы билдәләренә заказдар үтәгән. Күргәҙмәне асыу хөрмәтенә Владимир Нуждин музейға уларҙың эскиздарын, таш формаларын һәм республика өсөн яһаған иҫтәлекле билдәләрҙе эшләү технологияһын бүләк итте. Мөмкинлектән файҙаланып, Владимир Нуждиндан Өфөгә ҡағылышлы фекерҙәре менән бүлешеүен һораныҡ.

- Өфөнө үҙ итеп, яратып өлгөрҙөм. Ҡаланың киң, таҙа, төҙөк урамдары буйлап йөрөүе үҙе бер кинәнес. Ғәҙәттә, ҙур ҡалаларҙың төп, үҙәк урамдарында таҙа була ла, төпкәрәк инһәң, юлдар йә ямалған, йә бөтөнләй тишек-тошоҡтан тора. Ә Өфөлә бөтә ерҙә лә таҙа һәм төҙөк. Был һүҙҙәрҙе һауанан алып әйтмәйем, үҙем махсус рәүештә йөрөп ҡарап сыҡтым.

Күҙемә ташланған икенсе күренеште лә әйтеп үткем килә. Өфө буйлап йөрөгәндә урамда хаҡлы ялда булған оло йәштәгеләр һәм кескәй балалары менән әсәйҙәрҙе күберәк осраттым. Был нимә хаҡында һөйләй? Тимәк, барлыҡ халыҡ йә уҡыуҙа, йә эштә, йәғни был Өфө халҡының егәрле, эшсән булыуын күрһәтә. Был айырма мин йәшәгән ҡала менән Өфө араһында иҫ киткес ҙур. Әлбиттә, минең тыуған ҡаламда туристар күп, тип әйтергә мөмкин, ләкин барыбер айырма күҙгә ташлана.

Өфө - ыҡсым ҡала, күңелгә ятышлы ҡала. Беләһегеҙме, миңә Рәсәйҙең күп ҡалаларында булыу бәхете тейҙе, шулай уҡ сит илдәрҙә лә йыш булдым. Ҡайһы бер ҡалаға, күпме килһәң дә, өйрәнеп булмай, ул ниндәйҙер сит, ят, һалҡын. Ә икенсе бер ҡала тәү күреүҙән үк үҙенә ылыҡтыра, һин үҙеңде бында өйҙә кеүек тояһың. Өфө - минең өсөн нәҡ ошондай яҡын ҡала. Беренсе тапҡыр килгәндә үк әле үҙенең әйтеп аңлата алмаҫлыҡ йылылығы менән күңелемде арбаны ул. Шуға күрә, Өфөгә юлым төшһә, һәр саҡ шатланып-ҡыуанып йыйынам. Көс биргән, ыңғай тәьҫораттар булдырған ҡалалар менән бер рәттән, хәлде алған, кире тойғоларға сорнаған урындар була. Тәү ҡарашҡа, шул уҡ йорттар, урамдар, йөҙәрләгән кешеләр тегеләй-былай үтә, ә "күңеле" юҡ был урындың. Өфөлә, ғөмүмән, Башҡортостанда улай түгел - бында, нисектер, күңелгә яҡты.

Урындағы халыҡ асыҡ сырайлы һәм ихлас. Аралашырға тура килгән һәр бер кеше тураһында бары тик яҡшы хәтирәләр генә һаҡланасаҡ йөрәгемдә. Яуаплылыҡ көслө. Үҙ эштәренә ҡул һелтәп ҡараусылар һирәк. Урам һепереүселәрҙе генә алып ҡарағанда ла, иртә таңдан ҡара кискә тиклем үҙ биләмәләрен таҙарталар...

Өфө менән танышыуыма, уның тарихында бәләкәй генә булһа ла үҙ эҙемде ҡалдыра алыуыма, исемем Башҡортостан менән бәйле булыуына шатмын һәм бәхетлемен.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

*МӘҢГЕЛЕК ТЕМА*

**Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә тел сәйәсәте өлкәһендә бер ни тиклем торғонлоҡ, хатта ки кире күренештәр күҙәтелде. Былар иң элгәре илебеҙҙең күп милләтле халыҡтарының туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү мөмкинлектәрен сикләне. Шул уҡ ваҡытта элекке СССР составындағы республикаларҙа рус теленә иғтибар бермә-бер кәмене, уны уҡытыу үтә сикләнгән шарттарҙа башҡарылды, һөҙөмтәлә Рәсәйгә эш эҙләп килеүсе мигранттар рус телен йүнләп белмәй ҙә ине.**

# ДӘҮЛӘТ БУРЫСЫ ЛА УЛ -

## туған телдәрҙе һаҡлау




Күрәһең, билдәле бер сәйәсмәндәр тел проблемаһын икенсе, хатта өсөнсө пландағы мәсьәлә итеп ҡарай башлағандыр. Ысынбарлыҡта, оло Рәсәй илендә йәшәгән йөҙәрләгән халыҡтарҙың туған телдәре - бер ни менән дә алмаштырып булмай торған рухи-мәҙәни мираҫ, уны юғалтыу үҙе бер донъяуи трагедия булыр ине. Һәр халыҡтың үҙ тарихы булған кеүек, уларҙың телдәренең дә килеп сығышы һәм үҫешенең бай тарихы бар. Әгәр ҙә беҙ ошо тарихты һәм тарихи ысынбарлыҡты инҡар итһәк, бер нисек тә аҡлап булмаҫлыҡ сәйәси хатаға дусар булыр инек. Әммә, күреүебеҙсә, ил башында торған етәкселәр ошондай хатаға юл ҡуймаҫҡа булды. Был - бик ыңғай күренеш, ул Рәсәй халыҡтарының туған телдәренең киләсәкле булырына өмөт уята.

**Ағымдағы йылдың 22 августында Рәсәй Президенты Владимир Путин рус теленә һәм Рәсәй халыҡтары телдәренә булышлыҡ итеү өлкәһендә дәүләт сәйәсәтен бойомға ашырыу буйынса Совет булдырыу хаҡындағы Указға ҡул ҡуйғайны.** Президент советнигы Елена Ямпольская ошо Советтың рәйесе вазифаһына тәғәйенләнде. Башҡортостан Республикаһынан Совет составына Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы Камил Йыһаншин индерелде. Совет, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы консультатив орган булараҡ, тел сәйәсәте өлкәһендә ведомство-ара бәйләнештәр буйынса төп координатор буласаҡ.

5 ноябрҙә ил етәксеһе Владимир Путин видеоконференция рәүешендә әлеге Советтың тәүге ултырышын уҙғарҙы һәм ошо ҙур һәм ҡатмарлы проблема буйынса үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлашты. Ул әйткәнсә, рус теленә дәүләт теле булараҡ һәм Рәсәй халыҡтары телдәренә булышлыҡ итеү дәүләтебеҙҙең өҫтөнлөклө бурыстары иҫәбенә инә. "Бөгөн беҙ, илебеҙҙә һәм донъяла барған йылдам үҙгәрештәр шарттарын иҫәпкә алып, илдең барса халыҡтарының туған телдәрен һәм беҙҙең уртаҡ телебеҙ - Рәсәйҙең һәр гражданы өсөн туған тел булған рус телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса нимәләр эшләү зарурлығы хаҡында һөйләшәсәкбеҙ. Илебеҙҙең барса этномәҙәни, дини күп төрлөлөгө шарттарында тап рус теле беҙҙең рухи һәм милли берҙәйлегебеҙҙе билдәләй. "Рус теле" һәм "Халыҡ теле, Рәсәй Федерацияһы республикаһының дәүләт теле" кеүек уҡыу предметтары буйынса дөйөм белем биреү программаларын төҙөгәндә ошоларҙан сығып эш итергә кәрәк... Ҡабатлап әйтәм, рус теленә булышлыҡ итеү һәм уны донъя кимәлендә таратыу, Рәсәйҙең барса халыҡтары телдәрен һаҡлау беҙҙең күп милләтле ил өсөн беренсе урында тора, быны тейешле кимәлдә тәьмин итеү зарур: хоҡуҡи яҡтан, ресурстар менән, әлбиттә, йөкмәткеһе, асылы яғынан да", - тип белдерҙе В.В. Путин.

Совет рәйесе Елена Ямпольская фекер алышыу барышында бына нимәләрҙе һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Рәсәйҙә үҙенсәлекле мәҙәниәттәрҙе ниндәйҙер бер ҡаҙанға һалып "иретергә" тырышыу булманы, бында һәр халыҡтың уникаль булыуы ихлас баһалана, милли телдәргә хөрмәт менән ҡарау тарихи күренеш. Һәр бер телдең ни тиклем ҡиммәтле икәнен беләбеҙ, ә рус теле бөтөн Рәсәй граждандары өсөн туған тел кеүек ҡабул ителә...

Видеоконференцияла Совет ағзаһы Камил Йыһаншин да сығыш яһаны. Ул Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ҡануниәт положениеларының хәҙерге заман шарттарына тура килмәүен билдәләп үтте. **"Рәсәй халыҡтары телдәре тураһында" тип аталған закон 1991 йылда ҡабул ителгән, уға әлегә тиклем тейешле үҙгәрештәр индерелмәгән. Камил Фарухша улы ошо закон менән бәйле төп төшөнсәләрҙең аныҡ билдәләмәләре булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре 2025 йылда ғәмәлгә индереләсәк Рәсәй милли һүҙлек фондына Рәсәй халыҡтары телдәренең нормалары хаҡындағы бүлекте өҫтәргә тәҡдим итте.** Ил етәксеһе беҙҙең яҡташыбыҙҙың фекерен хупланы һәм Рәсәй халыҡтары телдәренең рәсми реестрын булдырыу мәсьәләһен дәүләт кимәлендәге бурыс тип белдерҙе. Яҡын киләсәктә республикабыҙҙа башҡорт теленә, башҡа халыҡтарҙың туған телдәренә иғтибар бермә-бер артыр тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле вазифаһын башҡарыусы итеп Ринат Фәйзуллин тәғәйенләнде. Әлегә тиклем ул Мәскәүҙә Башҡортостандың дәүләт власы органдары эшмәкәрлеген тәьмин итеү буйынса аппарат етәксеһе булып эшләне. Ул был вазифала Ришат Халиҡовты алмаштырҙы. "Мин һеҙгә аныҡ KPI ҡуям: инвестиция проекттары һаны, килгән аҡса күләме, йәштәр, яҡташтар менән эшләү, республика мәнфәғәттәрен күрһәтеү. Был бик мөһим йүнәлеш", - тип белдерҙе Радий Хәбиров.

✓Максим Забелин Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы һәм Мәскәү өлкәһенең Һаулыҡ һаҡлау министрлығын етәкләй. "Эш дауам итергә тейеш, шуға күрә был бурыс Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Азат Бадрановҡа йөкмәтелә. Беҙҙә бер ниндәй күсеү этаптары, йәш яугир курстары юҡ - алға барырға һәм эшләргә", - тине Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәсетле районында "Ҡарағай" хеҙмәткәрҙәрен һәм ветерандарын шифахананың 55 йыллыҡ юбилейы менән ҡотланы. Шифахана Мәсетле районының иҡтисади һәм социаль именлегенең мөһим терәге булып тора. Йыл һайын бында 7 меңдән ашыу кеше дауалана. Бөгөн шифаханала 200-гә яҡын хеҙмәткәр эшләй. Был арала Ҡарағай"ҙа 185 яугир һәм уларҙың ғаилә ағзалары дауаланыуы билдәләнде.

✓Башҡортостан "Иң яҡшы мәктәп ашханаһы-2024" конкурсының суперфиналсылары иҫәбенә инде. "Ауыл мәктәбенең иң яҡшы ашханаһы-2024" номинацияһында иң яҡшылар араһында Благовар районы Языково ауылының мәктәп ашханаһы ла бар. "Иң яҡшы мәктәп ашханаһы-2024" Бөтә Рәсәй конкурсының финал ярыштары 10 ноябрҙә Мордовияның Саранск ҡалаһында үтте. Конкурста илдең 75 төбәгенән 110 команда ҡатнашты.

✓Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин 2025-2026 йылдарға төбәктәргә онкология һәм ҡан тамырҙары үҙәктәрен ҡайтанан йыһазландырыуға субсидиялар күләмен үҙгәртеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Онкология үҙәктәре өсөн дөйөм сумма - 34,3 миллиард һум. Башҡортостанға 72,2 миллион һум йүнәлтелә. Ҡан тамырҙары үҙәктәрен йыһазландырыу өсөн 10,2 миллиард һум аҡса бүленә, шунын 23,6 миллион һумы - республикабыҙға, тиелә документта.

*✓ Трамптың власҡа яңынан килеүе Мәскәү тарафынан асыҡтан-асыҡ "ҡул сабып" ҡаршыланмаһа ла, Рәсәй сәйәсәтселәре даирәһендә Камала Харрисҡа ҡарағанда, Трампҡа өҫтөнлөк бирелеүе сер түгел ине.*



ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

**АҠШ президентын һайлау был осорҙағы донъя шаулатҡан ваҡиғаларҙың береһе булды. Уға ун көнләп ваҡыт үтеп тә китте, әлбиттә, ләкин беҙ ошо темаға тәүге дөйөм шау-шыу һәм хис-тойғо аҫтында түгел, ә был факттың реаль ысынбарлығы менән килешеп йә килешмәйенсә лә уны ҡабул итергә мәжбүр булған донъя йәмәғәтселеге һәм сәйәси даирәләрҙә эмоциялар баҫыла төшкәс мөрәжәғәт итергә булдыҡ, сөнки тәүге шауҡым тәьҫирендә йыш ҡына фекер айыҡлығы юғалып ҡалыусан бит.**

# КЕМ УЛ ҠЫРҠ ЕТЕНСЕ ПРЕЗИДЕНТ?



Шулай итеп, һайлаусылар тауышы иҫәпләнеп бөтөр-бөтмәҫтән үҙен АҠШ-тың 47-се президенты тип иғлан иткән Дональд Трамп икенсе тапҡырға власть башына килде. Тәүге тапҡыр ул ил менән 2017-2021 йылдарҙа, ул ваҡыттағы экс-дәүләт секретары Хиллари Клинтонды 77 тауышҡа артта ҡалдырып, 45-се президент булараҡ идара итте, ләкин ил халҡының әллә ни ихтирамын ҡаҙана алманы. Иң иҫтә ҡалғаны Трамптың 2020 йылда ҡасаҡтар һәм мигранттар өсөн Америкаға юлды ябыуы булды. Әйткәндәй, был ниәтен ул әле тағы ла ҡәтғиләштереү маҡсатында Мексика менән сик һыҙығында стена төҙөүҙе тиҙләтергә йыйына.

Трамптың 2017 йылда һалымдарҙы кәметеү һәм мәшғүллекте арттырыу буйынса законының аҙ килемле американдарға файҙа килтереүе ыңғай сараларҙың береһе булараҡ билдәләнә. Эске сәйәсәттә ыңғай ҡаҙаныштарынан суд системаһын реформалау, АҠШ-тың Космос көстәрен булдырыу, Ҡалым кодексын үҙгәртеү булһа, уңышһыҙ һәм хата булараҡ ҡылған ғәмәлдәренән Рәсәй менән Уртаса һәм бәләкәй аралыҡтағы ракеталарҙы юҡ итеү хаҡындағы килешеүҙе өҙөүе, Климат хәүефһеҙлеге буйынса Париж килешеүенән сығыуын әйтергә була. Дональд Трамп үҙенең тәүге президентлыҡ осоронда Рәсәй, Иран һәм Төньяҡ Кореяға санкциялар иғлан итә, өҫтәүенә, Рәсәй менән Ҡытай АҠШ-ҡа ҡаршы тороусы һәм уның милли хәүефһеҙлегенә янаусы илдәр тип нарыҡлана. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Трамп үҙен РФ Президенты менән яҡшы мөғәмәләлә тип иҫәпләй һәм 2017 йылда Владимир Путин менән осрашыуҙа мөһим темалар тикшерелә. Артабанғы йылдарҙа АҠШ Конгресы баҫымы менән Рәсәйгә ҡаршы 6 (2018) һәм 7 пакет (2019) санкциялар ҡабул ителә.

"Күренекле бизнесмен һәм миллиардер Дональд Трамптың ҡайтанан власҡа килеүе Рәсәйгә нимә бирәсәк?" тигән һорау күптәрҙе, шул иҫәптән, донъя күргән сәйәсмәндәрҙе һәм эксперт-күҙәтеүселәрҙе лә борсой һәм был шул нигеҙҙә төрлө фараздар ҡороуға килтерә. Иң беренсе, әлбиттә, Трамптың әле президентлыҡҡа кандидат булған сағында уҡ, әгәр һайлана ҡалһа, Рәсәй менән Украина араһындағы хәрби конфликтҡа 24 сәғәт эсендә сик ҡуйырға ниәтләүен бер нисә тапҡыр белдереүенә ҡараштар төрлөсә булды. АҠШ президентының: "Улар - рустар һәм украиндар - үләләр, мин уларҙың үлеүен теләмәйем һәм мин быны эшләйәсәкмен. Кеше ғүмерҙәрен юҡ итеүҙе туҡтатырға кәрәк", - тигән һүҙҙәренең һайлау алды "фишкаһы" ғына түгеллегенә ышанғы килә лә бит, асылда, эштең күпкә ҡатмарлыраҡ тороуын да онотоорға ярамай.

Тышҡы сәйәсәттә иң беренсе үҙгәрештәр, шулай итеп, Украина менән Израилгә ҡағыласаҡ, ти күҙәтеүселәр. Һайлауҙарҙан һуң Трамп Зеленский менән телефондан һөйләшкән һәм Украинаға ярҙам итәсәгенә ишаралаған, ләкин бер ниндәй аныҡ саралар хаҡында һүҙ булмаған. 6 ноябрҙәге был һөйләшеүгә Трамптың яңы команда ағзаһы, күренекле эшҡыуар, SpaceX корпорацияһына нигеҙ һалыусы Илон Маск та ҡушылған һәм ул Украина армияһына Starlink терминалдары ебәреүҙе дауам итәсәген әйткән. Яңы властың килеүе Зеленскийға ҡарағанда Нетаньяху өсөн отошло, тиҙәр: Трамп бер нисә тапҡыр инде Израилгә ярҙам итәсәге хаҡында ҡабатланы. Үткән президентлыҡ осоронда уҡ ул Иранға даими баҫым яһап, Израиль яҡлы икәнен күрһәткәйне инде. Шул уҡ ваҡытта әле, үҙе белдереүенсә, президентлыҡ осоронда бөтөн хәрби конфликттарға ла юлды ябасағы хаҡында һөйләй. Бына шундай ҡапма-ҡаршылыҡлы хәл-хәбәрҙәр сәғәте-минутында интернет селтәрҙәрендә яҙыла бара.

Хәйер, беҙ АҠШ-тағы яңы власть менән Рәсәй мөнәсәбәте хаҡында һүҙ башлағайныҡ. Эйе, Трампты сират тороп ҡотлаусылар исемлегендә тәүге сәғәттәрҙә үк Рәсәй Президентының исеме күренмәһә лә, Владимир Путин "Валдай" форумындағы сығышында бөтөн мир алдында Дональд Трампты еңеүе менән йылы ҡотланы һәм уны "ҡаһарман кеше" тип атаны; уның Украинаға ҡағылышлы тәҡдимдәрен иғтибарға лайыҡ, тине. Дөрөҫ, Трамптың власҡа яңынан килеүе Мәскәү тарафынан асыҡтан-асыҡ "ҡул сабып" ҡаршыланмаһа ла, Рәсәй сәйәсәтселәре даирәһендә Камала Харрисҡа ҡарағанда, Трампҡа өҫтөнлөк бирелеүе сер түгел ине, сөнки АҠШ-тың яңы лидеры белдереүҙәренән сығып, уның Киевты ҡорал менән тынҡыслауҙы туҡтатыуына өмөт бар, ләкин уның хаҡына Трамп Рәсәйҙән Ҡытай менән хеҙмәттәшлектән баш тартыуын талап итеүе ихтимал, ти ҡайһы бер эксперттар.

Сәйәсмән Яков Кедми фекеренсә, Трамп Рәсәй менән мөнәсәбәттәр көсөргәнешлеген яйға һалырға тырышасаҡ. Бер яҡшының бер яманы, тигәндәй, билдәле америка журналисы Такер Карлсонға интервьюһында яңы лидер Байден арҡаһында "берләшкән" Рәсәй менән Ҡытайҙы "айырырға ниәтләнеүе" хаҡында асыҡ белдерә. Шул айҡанлы Владимир Путин был ниәттең барып сыҡмаясағы һәм Ҡытай менән беҙҙе үҙ-ара ныҡлы ышаныс, хеҙмәттәшлек һәм дуҫлыҡ нигеҙҙәре бәйләп тороуын белдерә. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй лидеры Америка властары менән диалогҡа асыҡ булыуын иҫкә төшөрҙө. 7 ноябрҙә Дональд Трамп Владимир Путин менән телефон бәйләнешенә сыҡты. Ике арала һөйләшеүҙә АҠШ-тың яңы һайланған президенты Украина конфликтының тиҙерәк тамамланыуын теләүе хаҡында белдерҙе. РФ Президентының матбуғат секретары әйтеүенсә, Трамптың инаугурацияһына тиклем үк ике ил президентының шәхсән аралашыу ихтималлығы бар. Ғөмүмән, Трамптың ҠХР-ға ҡарата "бер төрлө генә" булмаған мөнәсәбәте, әйткәндәй, яңы "иҫке" президенттың һайлау алды программаһында уҡ асыҡ күренә ине: ул ҠХР менән "сауҙа һуғышы" сәйәсәтен дауам итмәксе һәм шуның бер сараһы итеп Ҡытай тауарҙарына пошлина күләмен 60 процентҡа арттырыуҙы күҙаллай. Сөнки, ти ул, ҡытайҙар һәм башҡа илдәр АҠШ-ты үҙ тауарҙары менән тултырыуға өмөт итмәһендәр, был Америка иҡтисадының төп тармаҡтарын үҫтереүгә ҡамасаулай.

Трамптың эске сәйәсәт өлкәһендә ҡайһы бер ҡараштары, мәҫәлән, балаларға либераль идеология тағып, уларҙы "трансгендер аҡылһыҙлыҡҡа өйрәтеүсе" һәм башҡа төр юл ҡуйылмаҫлыҡ раса, енси һәм сәйәси-либераль йүнәлеш биреүсе идеологияға ҡаршы көрәш иғлан итеүе, бындай мәктәптәрҙе федераль йәһәттән финанслауҙы туҡтатыу ниәте айырым иғтибарға лайыҡ. Электән үк ул традицион ҡиммәттәр идеяһын алға һөрҙө, ти күҙәтеүсе сәйәсмәндәр. Был мәсьәләне Трамп, асылда, "динле һәм консерватив" Америка халҡы өсөн бик мөһим тип иҫәпләй. Шул уҡ ваҡытта яңы лидер американдарҙың ҡорал йөрөтөүгә хоҡуғын яҡлап сығыш яһай - быныһы инде аптыратып ҡуя. Һайлауҙар барышында ике тапҡыр һөжүм акты кисереүен иҫәпкә алып, ҡайһы бер күҙәтеүселәр Трамптың үҙенә ҡаршы көрәшкән бәғзе һайлаусыларҙан үс алыу ниәте, шулай уҡ НАТО альянсы һәм уның ағза-илдәре хаҡындағы һәм башҡа өлкәлә ҡәтғи ҡараштары өсөн үҙ-үҙен хәүефкә дусар итеү тип иҫкәртеүҙе кәрәк таба.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан спортсыһы Юлия Чумгалакова бокс буйынса Рәсәй чемпионатында алтын миҙал яуланы. Ул 48 килограмға тиклем ауырлыҡ категорияһында Иваново өлкәһенән Лия Патлайҙы еңде һәм бишенсе тапҡыр Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды. Бынан алдараҡ "Башинформ" ике тапҡыр Рәсәй чемпионы Азалия Әминеваның көмөш призер булыуы хаҡында яҙғайны. Финалда башҡорт боксеры Төмән өлкәһенән Альбина Молдажанованан ғына еңелде.

✓Башҡортостанда республиканың йәштәр хөкүмәтенә һайлап алыу өсөн рәсми рәүештә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Һайлап алыу ике этапта уҙғарыла. Конкурста Башҡортостанда даими йәшәгән 18-35 йәшлек граждандар ҡатнаша ала. Йәштәр хөкүмәтенең яңы составына кандидаттарға https://clck.ru/3DgqVE электрон формаһын тултырырға кәрәк Ғаризалар 15 ноябргә тиклем ҡабул ителә.

✓Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы төбәктәргә туризм өсөн өс йылға - 2025-2027 йылдарға берҙәм субсидия биреүгә конкурс иғлан итте. Уның йыллыҡ күләме - 9 миллиард һум, тип хәбәр итteләр министрлыҡтың матбуғат хеҙмәтенән. "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ" милли проекттың ғәмәлгә ашырыу барышында ойошторолған конкурсҡа ғаризалар 2024 йылдың 6 декабренә тиклем ҡабул ителә.

✓Стәрлетамаҡ районында Махсус хәрби операцияла яраланып ҡайтҡан яугирҙың йортона "аҡыллы кухня" урынлаштырғандар. Хәҙер күреү һәләтен юғалтҡан МХО ветераны хәүефһеҙ һәм уңайлы шарттарҙа йәшәй. "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды ветеранды "Аҡыллы йорт" системаһы һәм бөтә кәрәкле ҡорамалдар менән бушлай тәьмин иткән.

✓Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы 2024-2025 йылдарға мәктәптәр өсөн уҡыу календарын баҫтырып сығарҙы. Элекке кеүек үк, быйыл да республика уҡыусыларын көҙгө, ҡышҡы һәм яҙғы каникулдар көтә. "Беренселәр өсөн өҫтәмә ял көндәре 2025 йылдың 15-23 февраленә билдәләнгән", - тип хәбәр итте Мәғариф министрлығының матбуғат секретары Лина Сарбаева. Йәйге каникул 27 майында башлана һәм 31 августа тамамлана.

✓Ғафури районында дүрт браконьер рөхсәтһеҙ мышыны атып, итен үҙ-ара бүлешеп алған. Полицейскийҙар уларҙың икәүһен - 41 һәм 43 йәшлек ирҙәрҙе тотҡан. Береһе быға тиклем дә хөкөмгә тарттырылған булған. Уларҙа мышы ите, теркәлмәгән һунар мылтыҡтары һәм патрондар табылған. Әле енәйәт эшен ҡуҙғатыу тураһында мәсьәлә хәл ителә, тип хәбәр итә Башҡортостан Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.

**✓ Проектта - 823 ҡатнашыусы, уларҙың 665-е - аҙыҡ-түлек һәм 158-е - башҡа төрлө тауарҙар етештереүселәр. "Башҡортостан продукты"нда ҡатнашыусы 326 кеше продукцияны Рәсәй субъекттарына оҙата.**



ҠЫҪҠАСА

# ӨР-ЯҢЫ ЕТӘКСЕЛӘР КИЛДЕ

**Башҡортостандың күпселек муниципалитеттарында хакимиәт башлыҡтарын тәғәйенләү буйынса конкурс тамамланды.** Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе: "Уҙған аҙнала күпселек районда яңы хакимиәт башлыҡтары тәғәйенләнде. Балаҡатай районында депутаттар советы бер тауыштан Лилиә Муллануровалы һайланы. Ул бар ғүмерен тыуған районына арнаған, эштең бөтә этаптарын үткән. Һеҙгә уңыштар теләйем", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе шулай уҡ Салауат ҡалаһы, Миәкә һәм Әлшәй райондары хакимиәттәренең яңы башлыҡтары менән таныштырҙы: "Салауаттың яңы мэры итеп хакимиәт башлығының йәшләйеште тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса урынбаҫары Альберт Моталов тәғәйенләнде. Миәкә районын - Наил Ғүмәров, Әлшәй районын Наил Әбелғужин етәкләй. Улар Башҡортостан Башлығы хакимиәте ойошторған кадрҙар конкурсын үтте. Ҡотлайбыҙ, уңыштар теләйбеҙ, - тине Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостандан тәүге ирекмән ҡатын-ҡыҙҙар отряды Луганскиҙа эш башланы. Был хаҡта республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.** Гордиенко һүҙҙәренсә, отряд составында хәрбиҙәрҙең ҡатындары, әсәләре һәм апай-һеңлеләренән тыш, тыныс тормошта яҡташтары өсөн гуманитар ярҙам йыйыуҙа ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бар. "Ирекмәндәр госпиталдәрҙә яраланған яугирҙәргә ярҙам күрһәтә, уларҙы операцияға әҙерләй, палаталарҙа дежурҙа тора. Ҡатын-ҡыҙҙар Луганск Халыҡ Республикаһында ике аҙна эшләй, һуңынан уларҙы отрядтың яңы составы алмаштыра. Әлеге ваҡытта ете волонтер Оборона министрлығы госпиталендә яралыларҙы ҡарай, - тип хәбәр итте Зөһрә Гордиенко. - Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирекмән отрядын булдырыу башланғысын хуплағаны өсөн - республика Башлығына һәм йөрәк ҡушыуы буйынса Махсус хәрби операцияла илебеҙ еңеүен яҡынайтҡан гүзәл заттарға рәхмәт белдерәм".

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәр "Башҡортостан продукты" тип яҙылған һәм республика флагы төҫтәрендәге логотип төшөрөлгән тауарҙарҙы яҡшы белә.** Был продукттың урында етештерелеүе, сифат һәм хәүефһеҙлек нормаларына тап килеүе хаҡында һөйләй. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙған. Проекттың дипломанттары йылдан-йыл арта, тип хәбәр итте ул. Әйтәйек, биш йылда улар 70 процентҡа артҡан, ошо осорҙа былдай маркировкалы тауарҙар һаны 30 меңгә еткән. Һуңғы ярты йылда проектта ҡатнашыуға 62 дипломант ҡушылған. Хәҙер проектта - 823 ҡатнашыусы, уларҙың 665-е - аҙыҡ-түлек һәм 158-е - башҡа төрлө тауарҙар етештереүселәр. Башҡортостанда етештерелгән сифатлы продукция республиканан ситкә сығарыла. "Башҡортостан продукты"нда ҡатнашыусы 326 кеше продукцияны Рәсәй субъекттарына оҙата, 35 дипломант продукцияһын сит илдәргә экспортлай. "Проектта ҡатнашыу етештереүселәргә төбәк һәм федераль сауҙа селтәрҙәренә инергә мөмкинлек бирә. Ысынында иһә республикабыҙҙа һәм унан ситтә ихтыяж ҙур булған берҙәм көслө бренд булдыра алдыҡ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. "Башҡортостан продукты" сифат билдәһен бушлай алырға мөмкин, тип хәтергә төшөрҙө Башҡортостан Башлығы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХЕҘМӘТЕ БАҺАЛАНДЫ



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың ҙур ҡаҙаныштары юғары кимәлдә билдәләнде: Кремлдә уға IV дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены тапшырылды. Илдең алдынғы төбәге етәксеһен бүләкләү тураһында указға ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған.**

Хәбәр ителеүенсә, Кремлдә республика Башлығына лайыҡлы награданы Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко тапшырған. Федераль үҙәк Радий Хәбировтың ил мәнфәғәттәрен яҡлауға индергән мөһим өлөшөн билдәләп үтте, тигән фекерҙә экспертттар.

"Тәү сиратта награда менән Радий Фәрит улының 2014 йылдан башлап яңы Рәсәйҙә булған ваҡиғаларҙағы ҙур роле билдәләнде. Сөнки "Ҡырым яҙы" ла, Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары өсөн формалашыу, аяҡҡа баҫыу мөмкинлеге лә - бында Радий Фәрит улының ҡаҙанышы ҙур.

Махсус хәрби операция башланғас, Башҡортостан Республикаһы Рәсәй төбәктәре араһында гуманитар ярҙам күрһәтеү, ирекле частар ойоштороу йәһәтенән лидер булды. Беҙ тотош Рәсәй өсөн ыңғай өлгө күрһәттек. Берләшеп, беҙ милли мәнфәғәттәрҙе яҡлайбыҙ һәм унда, алғы һыҙыҡта, ил өсөн көрәшкән кешеләргә ярҙам итәбеҙ.

Шуны билдәләп үтеү мөһим: Радий Фәрит улы республикаға 2018 йылда, бында бик күп процестар туҡталған ваҡытта килде. Инвестициялар йәлеп итеү буйынса проблема бар ине, төҙөлөш комплексы тотҡарланды. Бик күп иктисади һәм социаль күрһәткестәр түбәнәйҙе. Ошо ғәйәт ҙур эште башлап ебәреү, уға ыңғай импульс, яҡшы үсеш темптары биреү үтә ауыр булды. Биш йыл эсендә байтаҡ эштәр башҡарылды. Күптәр республиканың, ысынлап та, элекке кеүек үк, Рәсәйҙең үсеш локомотивы була, алдынғы позицияға сыға алыуына ышанды. Әлбиттә, быны эшләү шаҡтай ҡатмарлы, сөнки күп ваҡыт уҙған. Шуға ҡарамаҫтан, эш алып барыла, динамика күренә, уны федераль үҙәктән тыш, республика граждандары ла баһалай. Шуға күрә сентябрҙә үткән Башҡортостан Башлығы һайлауҙарында Радий Фәрит улының юғары һөҙөмтәгә өлгәшеүе осраҡлы түгел.

Быларҙың барыһы ла хәҙер лайыҡлы баһаланды. Был юғары наградаға республика Башлығы ысынлап та лайыҡлы", - тип иҫәпләй Башҡортостандың Стратегик тикшеренеүҙәр институты директоры, сәйәсәт фәндәре кандидаты, политолог Владимир Савичев.

# СИТТӘН КИЛГӘНҺЕҢ ИКӘН...

**Башҡортостандың Эске эштәр министры полиция генерал-лейтенанты Александр Прядко "Башинформ"ға биргән интервьюһында төбәктә мигранттар менән эш алып барылыуы хаҡында хәбәр итте.**

Ведомство башлығы әйтеүенсә, быйыл йыл башынан Башҡортостандан 1454 сит ил кешеһен Рәсәй Федерацияһы сиктәренән ҡыуып сығарғандар, шуның 1239-ын - мәжбүри рәүештә. "Беҙ мигранттар менән эште ике өлөшкә бүләбеҙ - был уларҙың илебеҙ территорияһында законлы һәм законһыҙ булыуы. Икенсеһе күберәк игтибарҙы йәлеп итә. Енәйәттәрҙе күберәк законһыҙ йәшәгәндәре ҡыла. Был йәмғиәткә оҡшамай. Ситуацияны власть органдары, ғәмәлдәге ҡануниәт контролдә тота, ә беҙ легаль булмағандарҙы асыҡлау йәһәтенән эш һөҙөмтәлелеген күп тапҡырға арттырҙыҡ. Улар сит ил граждандарын ваҡытлыса тотоу үҙәгендә булырға тейеш. Законһыҙ йәшәгән мигранттар һаны һуңғы йыл ярым эсендә күп тапҡырға артҡан", - тип хәбәр итте Александр Прядко.

Рейдтар ваҡытында хоҡуҡ һаҡлаусылар сит ил кешеләре эшләгән һәм эшләү мөмкинлеге булған 5 меңдән ашыу объектты тикшерҙе һәм 8 меңдән ашыу хоҡуҡ боҙоу осрағын асыҡланы. Миграция ҡануниәтен боҙоуға юл ҡуйған 189 юридик һәм 39 вазифалы кеше яуаплылыҡҡа тарттырылды. Уларға 3 миллион 160 мең һум штраф һалынды.

**Ксения КАЛИНИНА.**

# СӘНӘҒӘТ ҠАҘАНЫШТАРЫ

**Өфөнөң "Экспо" күргәҙмәләр комплексында Рәсәй сәнәғәт форумы, шулай уҡ "Машиналар эшләү", "Металл эшкәртеү" һәм "Өфөнөң инновация ҡеүәте" күргәҙмәләрен асыу тантанаһы булды.**

Рәсәйҙең 20 төбәгенән 100-ҙән ашыу компания, Белоруссиянан һәм Ҡытайҙан партнерҙарыбыҙ үҙҙәренең эшләнмәләрен һәм технологияларын тәҡдим итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бында машиналар эшләү тармағының алдынғы профессионалдары, экспертар, илебеҙ сәнәғәтселәре йыйылыуын билдәләне һәм Башҡортостандың дүртенсе йыл рәттән сәнәғәт сәйәсәте һөҙөмтәлелеге буйынса өс лидер иҫәбенә инеүен, инвестициялар йәлеп итеү рейтингында илдә өсөнсө урынды биләүебеҙ тураһында иҫкә төшөрҙө. "Беҙҙең машиналар эшләү өлкәһендә "Берләшкән двигателдәр эшләү корпорацияһы - Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе", Күмертау авиация етештереү предприятиеһы, "Гидравлика", "КАМАЗ" компаниялар төркөмө предприятиелары лидер булып тора. Шулай уҡ башҡа предприятиеларҙың да күрһәткестәре юғары. Хәҙер бөтә көс производстволарҙы үҙгәртеүгә, уларҙы роботлаштырыуға һәм цифрлаштырыуға, хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыуға, заманса кадрҙар әҙерләүгә йүнәлтелгән, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Дәүләт предприятиеларға ярҙам күрһәтә, льготалы займдар, гранттар һәм субсидиялар бирә. Беҙ "Алға" махсус иктисади зонаһын киңәйтеү, яңы индустриаль парктар һәм технопарктар булдырыу йәһәтенән эш алып барабыҙ. Тармаҡ-ара һәм төбәк-ара кооперацияны үҫтерәбеҙ".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Яңы йылға әҙерлек мәсьәләһе ҡуҙғатылды. Республика Башлығы чиновниктарҙы Махсус хәрби операция барған осорҙа корпоративтарҙан баш тартырға, уларҙы яҡшы ваҡытҡа тиклем ҡалдырырға саҡырҙы. Шул уҡ ваҡытта Радий Хәбиров балалар һәм ғаиләләр өсөн байрам ойоштороу: мотлаҡ рәүештә иртәлектәр үткәреү, төп шыршылар янында боҙ ҡаласыҡтары төҙөү кәрәклеген билдәләне.

✓ Өфө мэры Ратмир Мәүлиев баш ҡаланы ҡарҙан таҙартыу буйынса оператив кәңәшмәлә коммуналь һәм торлаҡ хужалығы идаралыҡтары етәкселәре өсөн "йоҡоһоҙ осор" башланыуын белдерҙе. "Һеҙҙең өсөн йоҡоһоҙ осор етте. Ныҡлы контроль булырға тейеш. Урамдарҙа, ихаталарҙа һәм йәмәғәт транспортында уңайһыҙлыҡтар килеп тыумаһын өсөн ҡышҡыһын бар көстө һалып эшләргә кәрәк", - тине Мәүлиев. Хәбәр ителеүенсә, 6 ноябрҙә Өфөлә айлыҡ норманың 17-23 проценты яуған, ә иртән баш ҡалала 10 баллы тығындар теркәлгән.

✓ Өфөлә Махсус хәрби операция яугирҙары бөҙрәханала, химик таҙартыу ойошмаһында, автосервиста, магазинда һәм дөйөм туҡланыу урындарында хеҙмәттәргә ташлама алырға мөмкин. Быныҥ өсөн баш ҡала властары предприятиелар һәм ойошмалар менән хеҙмәттәшлек тураһында 85 килешеү төҙөгән. Ташлама Украина, Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Херсон йәки Запорожье биләмәләрендә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу тураһында белешмә булған осраҡта бирелә. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8-987-490-11-52.

✓ Өфөлә 16-сы "Батырлыҡ йондоҙлоғо" Бөтә Рәсәй фестиваленең төбәк этабы еңеүселәре бүләкләнде. Геройҙар араһында 14-16 йәшлек уҡыусылар ҙа бар: Анна-Элиза Ванюшкина, Максим Гришуков, Шамил Фазлыев, Артур Фионов. Улар үҙ өлгөһө менән ҡаһарманлыҡтың йәшкә ҡарамауын раҫланы. Сарала ҡатнашыусы Рәсәй сенаторы, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова "Герой балалар" Бөтә Рәсәй граждანлыҡ-патриотик проектының 2014 йылдан бойомға ашырылыуы тураһында әйтте.

✓ Бразилияның Флорианополис ҡалаһында 18 йәшкә тиклемге егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында шахмат композицияларын сисеү буйынса донъя беренселегенең етенсе туры уҙҙы. Өфөнөң "Толпар" спорт мәктәбенән Ләйлә Табермакова 16 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар төркөмөндә бронза миҙал яуланы, тип хәбәр итте Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов. Хәбәр ителеүенсә, Өфөнән Азалия Әминева рингта яңы рекорд ҡуйҙы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ ТУРАҺЫНДА



(Башы 1-се биттә).

## Нимә эшләргә кәрәк?

Беренсенән, һәйкәлдең эске металл каркасын тергеҙеү кәрәк, ул сереп бөткән һәм авария хәлендә. Икенсенән, скульптураны тәртипкә килтереү мөһим. Боҙолған элементтарҙы тергеҙеүҙән тыш, белгестәр һәйкәлгә 2005 йылда юғалған тарихи ҡараһыу һоро төҫөн ҡайтарасаҡ һәм шулай уҡ юғалған элементты - геометрик биҙәкле сүкелгән бляха формаһындағы күкрәксәне тергеҙәсәк. Өсөнсөнән, скульптура реконструкцияла булған саҡта һәйкәл торған нигеҙҙе капиталь ныҒыталар, уға тәүге формаһын һәм габаритын ҡайтаралар. Постамент ҙурлығы, формаһы һәм фактураһы буйынса бер төрлө ҡара шымартылған гранит блоктары менән көпләнә. Былар барыһы ла һәйкәлгә юғалған тарихи үҙенсәлеген ҡайтарасаҡ, ә иң мөһиме, уны киләсәк быуындар өсөн тағы ла тиҫтә йылдарға һаҡлап ҡаласаҡ.

## Реставрация нисек үтәсәк?

Юридик процедуралар үткәндән һуң һәйкәлде постаменттан алалар, өләштәргә бүләләр һәм Өфө районларының береһендәге оҫтаханаға алып китәләр. Унда бер йыл самаһы эшләйҙәр. Һуңынан һәйкәлде кире алып ҡайталар, йыялар, ныҒытылған нигеҙгә ҡуялар һәм ул йәнә Башҡортостан халҡын һәм туристарҙы ҡыуандырасаҡ. Ремонт хаҡы 300 миллион һумдан ашыу тәшкил итә, аҡсаны Өфө бюджеты бүлә.

## Һәйкәлде урынынан алмай ғына булмаймы?

Ҡыҙғаныска ҡаршы, юҡ. Башҡортостан мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы начальнигы урынбаҫары Айнур Мөслимов аңлатыуынса, был һәйкәлдең эске таяу каркасин алмаштырыу кәрәклеге менән бәйле, ә уға һүтеп алмайынса инеү мөмкин түгел. Икенсенән, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, пьедесталды һәм ҡурғанды реставрациялау кәрәк - эске бетондың техник торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел.

## Быға тиклем һәйкәлде реставрацияларға алып киткәндәре булғанмы?

Был бик таралған практика. Сағыу миҫалдарҙың береһе - билдәле "Эшсе һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙ" скульптураһын реставрациялау. 2004 йылдың октябрендә һәйкәлде ашығыс рәүештә ремонтҡа алып китәләр, ул ярым емерелгән металл өйөмөнән ғибәрәт була. Скульптураны 40 өлөшкә бүлеп, һәр береһен айырым эшләгәндәр. Реставрацианан һуң Мәскәүҙең төп символдарының береһе яңы постаментҡа ҡуйыла.

Ҡыҙыл майҙанда урынлашҡан Кузьма Минин һәм кенәз Дмитрий Пожарский һәйкәле лә ошоға оҡшаш юл үтә. Бороноо скульптура халыҡ иғәнәһенә эшләнә, уның өҫтөндә эш хатта 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡытында ла дауам итә. Ошо уҡ ысул менән 2020 йылда Мәскәүҙә маршал Жуков һәйкәле реставрациялана. Бындай миҫалдарҙы тағы ла табырға мөмкин.

- Цехта һәйкәлде асырға, яҡтыртырға, йыуырға, каркасты ҡарарға, алмаштырырға, иретеп йәбештереү эштәрен башҡарырға мөмкин. Йәғни оҫтаханала ул бөтә художество үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, тулыһынса тергеҙелә ала. Урамда һауа шарттары ла, башҡа унайһыҙлыҡтар ҙа йоғонто яһай, - тип аңлата билдәле скульптор, 40-тан ашыу монументаль композиция авторы Салауат Щербаков.

Әммә ошонда "Ватан-әсә саҡыра!" скульптураһын реконструкциялауға ҡағылышлы һорау тыуа. Волгоградта уны бер кем дә һүтеп алманы. Ни өсөн? "Волгоград скульптураһын ремонтлау башлыса тышҡы өлөшөндә үткәрелә. Бынан тыш, скульптураның хәҙер торған урында уҡ бетондан ҡойолоуы ла һүтеүгә ҡамасаулай", - тип һөйләй Салауат Щербаков.

## Һәйкәл урынына кире ҡайтарыламы?

Әлбиттә, ҡайтарыласаҡ. Бында борсолорға урын юҡ. Бындай имеш-мимештәрҙе таратыу кемгәлер бик отошло. Был беҙҙең төп иҫтәлекле урын, унда йыл һайын йөҙҙәрсә мең турист килә, бында рәсми саралар үтә. Батыр исеме менән хоккей командаһы, дәүләт ордендары һәм премиялары, ҡала, ауыл, урамдар аталған. Милли гвардия ғәскәрҙәре составында Махсус хәрби операцияла әүҙем ҡатнашҡан батальонға Салауат Юлаев исеме бирелгән. Республикала йыл һайын Салауат Юлаев көндәре билдәләнә, уның сиктәрендә Салауат йыйыны республика фольклор байрамы үткәрелә. 2024 йылдың йәйендә батырҙың тыуған ягында Салауат районында "Салауат ере" тарихи-мемориаль комплексы асылды. Салауат Юлаев - республиканың айырылғыһыҙ символы. Шуға күрә ни өсөн һәйкәлде алырға?

## Әйткәндәй...

Өфөлә йәмәғәтсек вәкилдәре, скульпторҙар һәм белгестәр Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау хаҡында һөйләште. Халыҡ араһында таралған төрлө шау-шыуҙы булдырмау, бәхәсле һорауҙарға яуап биреү маҡсатында кәңәшмәлә яңыраған мөһим фекерҙәр менән уртаҡлашабыҙ.

БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Салауат Ҡолбахтин: "Ултырыш Мәскәүҙә дәүләт экспертизаһы тамамланыу алдынан үткәрелә. Беҙ төп дәүләт экспертизаһы алдынан үҙебеҙҙең позицияны белдереп ҡалдыҡ. Радий Хәбиров шундай бурыс ҡуйҙы: реставрацианан һуң һәйкәл тағы 100 йыл торорға тейеш. Беҙ бөгөн йыйылғандарға һәйкәлдең нисек емерелгәнен, бөтә комплексҡа ремонт кәрәк булғанлығын, постаментын алмаштырыу кәрәклеген аңлатырға теләйбеҙ".

Проекттың баш инженеры Максим Козлов: "Һәйкәлдең каркасы серегән. Бының хаҡында оҙаҡ һөйләштек һәм шундай ҡарарға килдек, тимер каркасты ныҡлыраҡ материалға - тутыҡмай торған ҡороҫҡа алмаштыраҫабыҙ. Дәүләт экспертизаһы техник өлөшөн тикшерҙе һәм бөтә етешһеҙлектәрҙе бөтөрәсәк".

Скульптор, Минлегәле Шайморатов һәйкәле авторы Салауат Щербаков: "Беҙ хәҙер тарихи ҡарар ҡабул итәбеҙ. Беҙҙең ейән-ейәнсәрҙәр ошо һәйкәлде күреп үҫәсәк, милли геройыбыҙ һәм донъя кимәлендәге монумент менән ғорурланасаҡ. Беҙ тешебеҙ ауыртһа, махсус урынға теш табибына барабыҙ, белгесте йортобоҙға саҡырмайбыҙ. Әлбиттә, һис шикһеҙ, цехта йүнәтергә кәрәк, белгестәр күҙәтеүе аҫтында эшләргә, нигеҙен алмаштырырға кәрәк. Рәссамдарҙың, тарихсыларҙың, әҙәбиәтселәрҙең эше мөһим, әммә хәҙер конструкторҙар, тимер буйынса техник белгестәр эш итергә тейеш. Һәйкәл үҙенең элекке йөҙөн юғалтырға тейеш түгел".

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ЙЫЛ ШЫРШЫҺЫ...

**25 декабрҙә Өфөлә уҡыусылар өсөн республика Яңы йыл шыршыһы ойошторола.** Байрамға уҡыу алдынғылары, олимпиадаларҙа һәм спорт ярыштарында еңеүселәр, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең балалары, ишле һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар саҡырыла. Йәмғеһе мең бала килер тип көтөлә. Яңы йыл тамашаһы "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры вазифаһын башҡарыусы Альберт Яримов хәбәр итте. Бынан тыш, балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә Яңы йыл кисәләре, ә ҡышҡы каникулдарҙа муниципалитеттарҙа Яңы йыл ғаилә уйындары ойошторола. Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, әле муниципалитеттар балалар өсөн мәҙәни саралар программаһын әҙерләй. 2024 йылдың 20 декабренән 2025 йылдың 10 ғинуарына тиклем республиканың мәҙәниәт учреждениелары 1,93 миллион кеше өсөн 28 мең сара үткәрергә йыйына.

✓ **Башстат Башҡортостан ҡалалары һәм райондары буйынса 2023 йылғы демографик күрһәткестәрҙе баҫтырып сығарҙы.** Шулай итеп, былтыр республикабыҙҙа 35 388 сабый донъяға килгән. Тыуым күрһәткесе 1000 кешегә 8,7 тәшкил иткән. Үҙған йылда иң күп сабыйҙар Өфөлә тыуған - 10 226. Башҡортостандың баш ҡалаһында тыуым күрһәткесе 1000 кешегә 8,6 булған. Статистиктар мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандың ҡала округтарында тыуымдың иң юғары күрһәткесе Нефтекамала күҙәтелә (мең кешегә 9,9). Шартлы икенсе урында - Сибай һәм Октябрьский (9,2). Артабан Өфө (8,6) һәм Стәрлетамаҡ (8,3) килә. Бишенселә инә Күмертау (7,0). Былтыр Башҡортостан райондары араһында юғары күрһәткес Баймаҡта (мең кешегә 14,9), Бөрйән районында (13,8) һәм Белорет районының ауыл биләмәләрендә (12) теркәлгән.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә депутаттарға киберһөжүм, мутлашыусыларҙың енәйәт эшмәкәрлеген әүҙемләштереүе хаҡында иҫкәртте.** Парламентарийҙарға һәм секретариат хеҙмәткәрҙәренә мессенджерҙар аша күплап хәбәрҙәр, шылтыратыуҙар килә, тип хәбәр итте ул. "Төрлө һылтау менән аҡса күсерергә мәжбүр итергә маташалар. Быны киберһөжүм тип атарға мөмкин. Мутлашыусылар минә йәки минең коллегаларыма һылтана, махсус хәрби операция, Украина темаһына баҫым яһала. Сер түгел, был ил ошондай законһыҙ ғәмәлдәрҙең төп бенефициары булып тора. Уяу булығыҙ, алдаҡҡа бирелмәгеҙ һәм мәғлүмәтте янынан тикшерегеҙ!" - тине парламент спикеры.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Шыма көпшә

Шыма көпшә, йәки айыу ҡурайы, русса "дягиль лекарственный" тип йөрөтөлгән ике йыллыҡ үҫемлек. Һабағы бураҙналы, тармаҡлы, өҫкә ҡарай шәмәхә төҫөндәрәк. Япраҡтары ҙур, сиратлашып килә, асыҡ йәшел төҫтә. Июнь-июль айҙарында ҙур сатырға йыйналған ваҡ ҡына йәшкелт аҡ сәскә ата. Шыма көпшәнең тамыры һәм тамырһабағында эфир майҙары, балауыҙ, дуплау матдәләре, ҡайһы бер органик кислоталар бар. Икенсе йыл үҫкән үҫемлектең тамыр һәм тамырһабағын ҡара көҙҙә ҡаҙып алып ҡулланалар.

Шыма көпшә ҡан йөрөшөн тиҙләтә, иммунитетты күтәрә. Әсеүгә, елһенеүгә ҡаршы, тирләткес, бәүел ҡыуҙырғыс, ҡаҡырыҡты сығарыусы, тынысландырыусы көскә эйә. Уның һыуға спирт ҡатыштырып яһалған төнәтмәһе ревматизм, подагра, артрит, радикулитты дауалауҙа ҡулланыла.

Иғтибар: шыма көпшәнең тамырын эшкәрткәндә тирегә күпертке сығыуы ихтимал, һаҡ булырға кәрәк.

❖ Артриттан шыма көпшә тамырын ваҡларға һәм 1:10 нисбәтендә араҡы ҡойорға. Быуындарҙы ыуырға.

❖ Йөҡөһоҙлоҡтан 15 грамм киптерелгән шыма көпшә тамырына 1 стакан һыу ҡойорға, ҡайнап сыҡҡас, тағы 10 минут тоторға һәм һыуытып һөҙөргә. Йоҡларҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Бронхиттан да йоҡоһоҙлоҡтан ҡулланған ысул менән төнәтмә әҙерләп эсергә була. Тик был осраҡта көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

## Әнис

❖ Ларингиттан 1 балғалаҡ ваҡланған әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15 минут талғын утта ҡайнатып, марля аша һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ дауаны ашарҙан 20 минут алда эсергә. Ул тамаҡ кипкәндә, тауыш ултырғанда ярҙам итә.

❖ Бөүерҙә таш булғанда 2 балғалаҡ әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда 3 тапҡыр эсергә. Төнәтмәне 3-4 аҙна эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Ялған хәбәрҙә күрһәтелгән Өфө йыйылыу пунктында тыныс мөхит, егеттәр хәрби частарға тәғәйенләнгәндән һуң юлға әҙерләнә. Призывниктар әйтеүенсә, йыйылыу пунктында йәшәү шарттары яҡшы.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Алтынһыу сәпсәү**

**(Золотистая ржанка)**



Барҡылдаҡтан ҙурыраҡ. Кәүҙәһенең өҫкө яғы алтынһыу сыбар, аҫҡы яғы ҡара, уларҙы киң аҡ һыҙат айырып тора. Ҡанатының аҫҡы өлөшө лә аҡ. Ҡойроғо арҡаһы һымаҡ сыбар. Тулестыҡы кеүек ҡара "алъяпҡыс"ы бар. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 26-29 см, ҡанаты йәйелгән көйөнә 67-76 см.

Тундра һәм урманлы тундрала йәшәй. Яҙын Көньяҡ Уралда ла күренеп ҡала. 1952 йылда ғалим Кириков уны Сара станцияһы тирәһендә, 1952 йылда Ершов Шишмә районы Яңы Усман ауылы эргәһендә күрә. Ошо уҡ райондың Ябалаҡлы ауылы эргәһендәге һөрөлгән баҫыуҙа 10 алтынһыу сәпсәү йөрөгәнен 1958 йылда тап итәләр. Тимәк, беҙҙең төбәк орнитофаунаһында алтынһыу сәпсәү һирәк, осоп барышлай ғына туҡтап китеүсе төр. Британия утрауҙарынан алып Африка төньяғына тиклем, шулай уҡ Яҡын Көнсығышта ҡышлай. Башҡортостандың Ҡыҙыл Китабына 4-се - билдәләнмәгән статуслы төр булараҡ индерелгән.

**Ала сәпсәү**

**(Хрустан)**



Сыйырсыҡтан ҙурыраҡ ҡош, суҡышы ҡыҫҡа, ҡашы, тамағы - аҡ, түше, арҡаһы көл төҫөндә, ҡорһағы һоро, алғы яғында аҡ буй һыҙыҡ бар, башы - ҡара. Тауышы сағыу, көслө, "питьпить-пить" тип ишетелә. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 20-22 см, ҡанаттарын йәйһә 57-64 см-ға етә.

Беҙҙә бик һирәк осрай. Яҙын һыу баҫҡан баҫыуҙарҙа туҡтап киткеләй. Шулай ҙа Ямантауҙа оя ҡороп йәшәй, 1960 һәм 1962 йылдарҙың июлендә В.Г. Ершов уларҙы нәҡ ошо төбәктә тап итә һәм күҙәтә. Кешенән ҡурҡмай, уға ныҡ яҡын килә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АЛДАЙҘАР!*

# УЛАР ҠАРМАҒЫНАН...

## ысҡыныу еңел түгел



**Мораҙым Ибраһим улы август айында сираттағы отпускыға сыҡты. Көндәр ямғырлы тора, етмәһә, һалҡынырaҡ та. Мораҙым, төрлө йомоштарын барлап, ҡала буйлап төшкә тиклем йөрөп ҡайтты. Төшкө аштан һуң, диванға ҡырын төшөп ятып, телефонынан ватсап хәбәрҙәрен ҡарай башланы.**

Бәй, уның ойошмаһының директоры Шәүкәт Шәфҡәт улы ла уға хәбәр ебәргән икән: "Кемдер беҙҙең ойошма ағзалары хаҡындағы персональ мәғлүмәттәрҙе ситкә сығарған, шуға күрә тикшереү буласаҡ. Телефондан шылтыратһалар, иплән кенә яуап бирегеҙ". Көн кискә ауышты, сәғәт 5 тә булып китте, бер кем дә шылтыратмағас, Мораҙым урамға йүнәлде. Автобус туҡталышына барып етеүгә, телефон шылтыраны. Шылтыратыусының номеры бәйләнештә булмаһа ла, Морҙым уны тыңларға булды. Яғымлы ғына тауышлы ҡатын кеше былай тип һүҙ башланы: "Һаумыһығыҙ, Мораҙым Ибраһим улы! Һеҙҙе Росбанкнадзор рәйесе ярҙамсыһы Лидия Борисовна борсой. Быны нимә: һеҙҙең персональ мәғлүмәттәрегеҙҙе ҡулланып, һеҙҙең исемдән Украинаға ҙур суммала аҡса күсерергә маташҡандар. Әлегә аҡсаны Федераль именлек советы хеҙмәткәрҙәре тотҡарлап тора. Әммә уларға һеҙҙән ярҙам кәрәк. Һеҙгә Мәскәүҙән Федераль именлек советы майоры Владислав Черный шылтыратыр, телефонды алырһығыҙ. Һау булығыҙ".

Ысынлап та, күп тә үтмәне, әлеге кеше шылтыратты, был видеошылтыратыу ине. Урта йәштәрҙәге ир кеше ыҡсым ғына кабинетта ултыра, стенала Президент В.В. Путиндың портреты, кәштәләр тулы папкалар. Владислав Черный иң элгәре үҙенең эш таныҡлығын экранға яҡын килтереп уҡ күрһәтте. Шунан кәштәнән бер папканы алып, уҡый башланы: "2024 йылдың 15 авгусында Шәймәрҙәнов Мораҙым Ибраһим улы бер Украина кешеһенә 800 мең һум аҡса күсерергә булған, әммә Федераль именлек советының банк контроле комитеты хеҙмәткәрҙәре ошо сумманы Украинаға сығармай тотоп ҡала. Аҡса ВТБ банкыһынан күсерелергә тейеш була. Һеҙ, Мораҙым Ибраһим улы, беҙгә ошо банкта эшләгән яуыз уйлы хеҙмәткәрҙе тоторға ярҙам итергә тейешһегеҙ".

Шылтыратыусы тынып ҡалды. Мораҙымдың аптырауы, хатта кинәт кенә ҡаушап китеүе тауышында уҡ сағылды: "Иптәш майор, мин ВТБ банкыһының клиенты түгел, унда барғаным да юҡ, унан һуң, минең 800 мең һум аҡсам булғаны ла юҡ, үҙем бер юлы ике банкҡа кредит түләп торам". Черный:

- Эйе, беҙгә һеҙҙең турала, ғаиләгеҙ тураһында барыһы ла билдәле. Әүәл законһыҙ митингыла ҡатнашҡан өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылып, штраф түләгәнһегеҙ. Ҡатынығыҙ Рауза Хәкимйән ҡыҙы - табип. Марат, Илшат, Рөстәм исемле улдарығыҙ бар, ҡыҙығыҙҙың исеме Гөлшат. Дөрөҫмө?

- Эйе, дөрөҫ.

- Ниндәй банктарҙан кредит алған инегеҙ?

- Россельхозбанк һәм Альфа-банктан.

- Ярай. Әммә финанс документтары һеҙҙе гәйепләү өсөн нигеҙ булып тора. Һеҙгә ҡарата енәйәт эше асыласаҡ. Әммә беҙгә ярҙам итһәгеҙ, беҙ был эште туҡтата алабыҙ.

- Мин һеҙгә нисек ярҙам итә алырмын һуң?

- Бына быныһы яҡшы, молодец, иптәш Мораҙым Ибраһим улы. Эш бик ябай. Һеҙгә әлеге ВТБ банкына барып, 800 мең һум кредит алырға кәрәк. Артабан ни эшләү тураһында ентекле инструкция бирербеҙ.

- Иптәш майор, минең түләнеп бөтмәгән кредиттарым бар, минә башҡаса бер банк та кредит бирмәйәсәк.

- Артыҡ күп һөйләнәһегеҙ. Федераль именлек советы өсөн кәртәләр юҡ. ВТБның Өфөләге офисына шылтыратырбыҙ, һеҙгә һис шикһеҙ кредит бирәсәктәр. Хәҙер уҡ банкҡа барығыҙ, тик Федераль именлек советы хеҙмәткәре менән һөйләшкәнегеҙ хаҡында бер кемгә лә әйтә күрмәгеҙ. Аңлағыҙ, беҙ һеҙҙе енәйәт эшенән ҡотҡарырға теләйбеҙ. Әгәр иртәгәгә тиклем 800 мең һум аҡсаны беҙ әйткән адрес буйынса күсермәһәгеҙ, һуң буласаҡ. Өфөләге ВТБ банкы хеҙмәткәре аҡсаны күсерәсәк, ул Украиналағы дошмандар менән бәйләнеш тота. Беҙгә ошо аҡса аша уны фашларға кәрәк. Аҙаҡтан һеҙ алған 800 мең һум кредитты банкҡа кире ҡайтарып бирәсәкбеҙ. Аңлашылдымы?

- Эйе, әммә мин хәҙер уҡ банкҡа бара алмайым, сөнки Мәскәү менән ике сәғәтлек ваҡыт айырмаһы, банктар ябылды инде.

- Ярай, әммә иртәгә иртүк банкҡа барып, беҙ әйткәнсә эшләгеҙ. Һеҙ - беҙгә, беҙ һеҙгә ярҙам итербеҙ.

Мораҙым өйгә ҡайтып инеүгә, ҡатыны Рауза ҡаршы алды.

- Ни эшләп улай төҫөң ҡасҡан, йөҙөң дә ныҡ борсоулы күренә, ҡыҙарынып киткәнһең? Әллә ҡан баҫымың күтәрелдеме? - тип һораша башланы ҡатыны. Ҡыйын булһа ла, Мораҙым килеп тыуған хәлде бәйнә-бәйнә аңлата башланы. Шул саҡта уларҙың ни хаҡында һөйләшкәнен тыңлап торған кесе улдары Рөстәм хахылдап көлә башланы:

- Атай, һине бит мошенниктар арбаған, үәт әй, шулай ҡармағына эләгә яҙғанһың бит!

- Эйе шул, баштан уҡ шикләнә инем дә ул. Уйын уйнаған кеүек булды бит, шул тиклем таҫма теллеләр. Ышанмаһаң да ышанырһың. Рәхмәт, улым, хәҙер үҙем дә аңланым инде, кешеләрҙе арбар өсөн ысын сценарий буйынса эш итәләр, сыуалыштар, ҡәһәр төшкөрҙәре. Үәт әй, спектакль уйнайҙар, һинә лә шул спектаклдә роль бирәләр. Һа-а-й, уларҙың ҡорған тоҙаҡтарына күптәр эләгә бит!

Мораҙым йәһәт кенә телефонын алып, "Владислав Черныйға" шылтыратты:

- Иптәш ялған майор! Һеҙгә бөгөн крупно не повезло! Мин һеҙҙең йәтмәгеҙҙән сығып китә алдым, так что һеҙ телгән балыҡты ҡаптыра алманығыҙ!

- Ни һөйләйһегеҙ ул? Мин хәҙер һеҙгә полиция нарядын саҡыртам, һеҙҙе ҡулға аласаҡтар!

- Һеҙҙең үҙегеҙҙе күптән ҡулға алырға ваҡыт. Күпме кешене алданығыҙ, сволочтар! Барыбер бер фашларҙар һеҙҙе, мутлашыусыларҙы.

Ялған майор башҡа бер ни ҙә өндәшмәне, яман итеп һүгенде лә телефонын һүндерҙе.

Шулай итеп, Мораҙым мутлашыусыларҙың сираттағы ҡорбанына әйләнмәй ҡалды...

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

**Редакциянан:**
**Быныһы ла булған хәл.**

*БЫНЫҺЫ ЛА ЯЛҒАН!*

# ИМЕШ-МИМЕШКӘ ЫШАНМА!

**Ошо көндәрҙә WhatsApp мессенджерындағы ҡайһы бер чаттар һәм каналдар Өфөләге йыйылыу пунктында хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙың Курск өлкәһенә ебереләеүе хаҡында ялған мәғлүмәт баҫтырҙы. "Баш ҡала йыйылыу пунктына 312 призывникты йыйғандар, насар шарттарҙа тоталар, уларҙы Курск йүнәлешенә ебәрергә йыйыналар", тиелә унда. Мәғлүмәттәр ябыҡ чаттар буйлап таралған.**

Башҡортостан Хәрби комиссариатының граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү һәм саҡырыу булеге начальнигы Спартак Джикаев әйтеүенсә, әрмегә саҡырылыусылар Махсус хәрби операция зонаһына, шулай уҡ Курск өлкәһенә ебәрелмәйәсәк. "Интернетта таралған яҙманы уҡып сыҡтым. Был ялған мәғлүмәт, ысынбарлыҡҡа тап килмәүен тулы яуаплылыҡ менән әйтә алам. Атап әйткәндә, октябрь айында 800-ҙән ашыу кешене хеҙмәт итеү урындарына оҙаттыҡ, егеттәр Мәскәү, Һамар, Саратов һәм Ленинград өлкәләрендә, шулай уҡ Ростов өлкәһенең көньяҡ өлөшөндә хеҙмәт итә. Башлыса - Үҙәк федераль округ. Курск өлкәһенә октябрҙә лә, ноябрҙә лә оҙатыу планлаштырылманы", - тип билдәләне Джикаев.

Ялған хәбәрҙә күрһәтелгән Өфө йыйылыу пунктында тыныс мөхит, егеттәр хәрби частарға тәғәйенләнгәндән һуң юлға әҙерләнә. Призывниктар әйтеүенсә, йыйылыу пунктында йәшәү шарттары яҡшы. "Мин Дзержинскиға хеҙмәт итергә барам. Бында 7 ноябрҙән бирле йәшәйем. Барыһы ла яҡшы. Тәмле ашаталар. Төшкө ашҡа салат, һурпа, өҫтәп ҡарабойҙай йә макарон бирәләр", - тип билдәләне хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙың береһе Илнар Фазлыев. "Бөгөн кис юлға сығабыҙ, Мәскәү өлкәһендә Милли гвардияла хеҙмәт итәсәкмен. Ата-әсәйҙәр, һәр ир-егеткә хеҙмәт итергә кәрәк, тиҙәр. Бөтә ир-егеттәр ҙә быны үтергә тейеш", - тине Радмир Баяҙголов.

Хәбәр ителеүенсә, көҙгөһөн Башҡортостандан хәрби хеҙмәткә 4 меңдән ашыу кеше алынасаҡ. Призывниктар Ҡоралды Көстәрҙең бөтә тармаҡтарын һәм булексәләрен, шулай уҡ башҡа федераль башҡарма органдарҙың хәрби частарын тулыландырасаҡ. Шул уҡ ваҡытта хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итмәйәсәк.

✓ *1833 йылда башҡорт ерҙәрен һатыу буйынса индерелгән законға ярашлы, килешеү суммаһының өстән бер өлөшөн йәмәғәт капиталына әйләндереү ҡаралғайны; ерҙәрҙе ҡуртымға биргән саҡта ла шул уҡ ҡағыҙҙа үтәлергә тейеш булды.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Иң башта уҡ уңышһыҙлыҡҡа осрау эште боҙа. Ябай казактар ҙа, уларға яҡын булған түрәләр ҙә ер һөрөп эшкәртеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа күрмәй, уны тик артыҡ йөкләмә итеп ҡабул итә, ул тик эштәр барышын күҙәтеүселәргә төшөм килтерә, һәм ер эшкәртеү, дөйөм фекер буйынса, барщинаға тинләнә, уны көсәйтеү, казактарға эш өҫтөү артабан түрә-ғаранан тора.

Казактар был эштең батша ғали йәнәптәре ихтыярында булыуына ышанмай, улар бит уға үҙҙәренең милеге иҫәбенә хеҙмәт итә, етмәһә, уларҙан күҙәтеүселәр файҙаһына эш талап итәләр. Бер бот иген сәсеү әллә ни ваҡытты талап итмәй, әммә ысынбарлыҡта улай килеп сыҡмай: ғаиләлә ике-өс казак булһа, береһе ситтә хеҙмәттә, аталары ҡарт инде, ә казактың бер үҙенә өс бот иген сәсеү еңелдән булмай, сөнки ауыр эшкә ике аҙнаға тиклем ваҡыт талап ителә, һәм был ҡиммәтле ваҡыт казактың үҙенең хужалығына зыян ғына килтерә.

Түрәләрҙең ҡәтғи талаптарына ярашлы, күҙәтеүселәр итеп үтә талапсан кешеләр ҡуйыла. Улар, эштәрҙе ваҡытында башҡарыуҙы үҙ мәнфәғәттәренә тура килгәнгә күрә, кемдәрҙер тырышлыҡ күрһәтмәгән хәлдә, уларға ҡарата таяҡ һәм ҡамсы ҡуллана. Күҙәтеүселәр баһаһына тейгән өлөш яҡшы ғына кимәлгә - йылына 900 һум ассигнацияға етә; уларҙың ике ярҙамсыһына яртылаш күләмдә түләнә.

Перовский губернатор булған тәүге йылдарҙа ер эшкәртеү ҡәнәғәтләнерлек бара, әммә 1839 йылдан башлап эштәр һүлпәнләнә; ул йылда иген бөтөнләйгә уңмай, ер эшкәртеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа күрелмәй. Бер йылдан һуң иске станицаларҙан казактарҙы линияға күсереү башлана һәм ер эшкәртеүҙә барса халыҡ та ҡатнаша алмай, ә 1842 йылда Перовский урынына генерал Обручев тәғәйенләнгәс, ул тәүге көндәрҙән үк үҙенән алда губернатор булған кешенең проекттарын үҙһенмәй, бигерәк тә йәмәғәт ерҙәрен эшкәртеүгә ҡарата. Линияға күсеп килгән иске станицалар казактары ошо эшкә ерәнеп ҡарауҙарын яңы урындарҙа иптәштәренә лә күсерә. Ер эшкәртеүҙе бер кем дә үҙһенмәй.

Обручев был эш буйынса түләүҙәрҙе туҡтата, үҙенең канцелярияһы ҡарамағындағы айырым бүлекте бөтөрә, барса эштәрҙе ғәскәр идаралығы ҡарамағына күсерә, тик отчеттар ғына талап итә. Шулай ҙа ер эшкәртеү дауам итә, әммә игенде насар һөрөлгән ергә, казактар үҙ сәсеүлектәрендә эштәрҙе тамамлағас ҡына сәсәләр һәм нимәлер үҫкән хәлдә үҙ эштәрен тамамлағас ҡына урып алалар, һөҙөмтәлә ашлыҡ бик аҙ йыйыла. Былар барыһы ла ер эшкәртеүҙе бөтөрөү тураһында үтенес юллауға килтерә. Төбәк менән идара итеүгә Перовский икенсегә килеүгә был үтенес министрлыҡта ҡарала һәм уның сиселеше үҙ урынында аңлатыласаҡ.

Перовский, ғәскәр килемдәрен арттырыу өсөн уңайлы сығанаҡтар эҙләп табыу йәһәтенән, ғәскәргә ер аҫты байлыҡтарына хоҡуҡ биреү хаҡында хәстәрлек күрә, бигерәк тә урындағы мөмкинлектәр казак ерҙәрендә алтын сығарыу сәнәғәтен үҫтереү өсөн ҡулайлы булғанлыҡтан, ҡаҙнанан 150 мең һум ассигнация, йәғни ул саҡтағы иҫәп буйынса 43 мең һум аҡса күсереүҙе һорай. Былдай хоҡуҡ 1835 йылда бирелә; ғәскәр үрҙә күрһәтелгән сумманы ала, ә алтын ятҡылыҡтарын үҙләштереүгә шәхси кешеләрҙе йәлеп итеү хоҡуғы ҡаҙнаға бирелә. Тәүҙә был эш өсөн эшҡыуарҙар табылмай, казактар ҙа бер ниндәй ҙә килем алмай, шуға күрә финанс министрлығы аҡса бүлеүҙе туҡтатырға теләй.

1842 - 1845 йылдарҙа бында казак офицеры, эшҡыуар Колбин килә, ул алтын ятҡылығын аса, һәм ошо ваҡыттан башлап был сәнәғәт өлкәһе үҫешә башлай: йылына 100 ботҡа тиклем алтын табыла, ә хәҙер Качкар системаһында алтын юлағы асылды. Ғәскәргә һиммәтһеҙ металдарҙы һәм минералдарҙы ҡуртымлыҡҡа биреү хоҡуғы 1853 - 1855 йылдарҙа Перовскийҙың тәҡдиме менән айырым закон буйынса бирелә, тик әлегә тиклем ҡуртымға биреү булғаны юҡ, әммә казак ерҙәре аҫтында бай мәғдән ятҡылыҡтары булыуына шик юҡ.

Башҡорт ерҙәрендәге тәбиғи байлыҡтар шәхси сәнәғәтселәр ҡулында булып, улар, юҡ дәрәжәһендә ҡуртым суммаһы түләп һәм шул уҡ башҡорттарҙы аҙ ғына эш хаҡына үҙҙәренә яллап, үҙ мәнфәғәттәрендә бик ҙур килем ала ине. Был халыҡтың үҙҙәренең кантон начальниктары һәм старшиналары булды, улар халыҡ иҫәбенә йәшәне һәм ришүәт алып байыны - уларға жалованье түләү өсөн аҡса булманы.

Граф Сухтелен, был хәлде иғтибарға алып, башҡорт урмандарында бүрәнә, утын һәм башҡа нәмәләр әҙерләүсе шәхси урман сәнәғәтселәренә айырым пошлина индерҙе, ул хужаларҙың йылына ниндәй күләмдә ағас һата алыуын билдәләп, һатыу-алыуҙы баҙарҙарҙа башҡарыу шарты менән урман материалдарын һал менән ағыҙып түгел, ә йөктәргә тейәп килтерергә бойорҙо.

1833 йылда башҡорт ерҙәрен һатыу буйынса индерелгән законға ярашлы, килешеү суммаһының өстән бер өлөшөн йәмәғәт капиталына әйләндереү ҡаралғайны; ерҙәрҙе ҡуртымға биргән саҡта ла шул уҡ ҡағыҙҙа үтәлергә тейеш булды. Шулай итеп, башҡорт капиталына нигеҙ һалынды, ул һуңынан ҙур ғына күләмдә тупланды.

Был ҡағиҙәләр тәрән реформа яһаны. Шәхси кешеләр, айырым абруйлы хужалар менән генә килешеп, аҫаба хужаларының дөйөм ризалығынан башҡа ер һатып ала һәм башҡорт биләмәләрен эксплуатациялай алмай; бының өсөн аҫаба башҡорттарҙың яҙма ризалығы индерелгән приговор кәрәк була, ул хәрби губернатор тарафынан раҫлана һәм формалы контракт төҙөлә. Был процедура күп ваҡыт һәм башҡорттарға кеҫә аҡсаларын таратып биреү, кантон начальниктарына һәм старшиналарға бүләктәр алыу өсөн ҙур сығымдар талап итә, һуңғыларының булышлығынан башҡа эш бойомға ашмай, ә приговор раҫланмай ҡалһа, бөтә сығымдар юҡҡа сыға, уларҙы бер кемдән дә талап итеп булмай, сөнки башҡорттар расписка бирмәйҙәр. Шулай итеп, артабан башҡорт урмандарын файҙаланыу өсөн контракт акттары аҫабалар ризалығы менән төҙөлгән, әммә эштәрендә ниндәй ҙә булһа ҡағиҙә боҙоуҙары табылған сәнәғәтселәр ҡыуыла. Башҡорттар үҙҙәре дәғүә ҡағыҙҙарын (исктарҙы) бирә алмай ине; улар өсөн начальство ҡушыуы буйынса стряпчийҙар юллама яҙыу эшен башҡара, етәкселек сәнәғәтселәрҙе земство полицияһының ябай ҡарары буйынса ҡыуып ебәрергә ҡуша, ә һуңғылары хәрби губернаторҙың бойороғон тыңламай булдыра алмай.

Эштең ошондай халәттә булыуына һылтанып, Перовский башҡорттар, төбәк мәнфәғәттәре һәм башҡа бер ихтыяждар өсөн дөйөм файҙаға килем алыу мөмкинлеген күҙаллай. Уның ҡарары буйынса өс поташ заводы төҙөлә (агас көлөнән алынған калийлы матдә. - **Тәрж. иҫк.**), уларға башҡорттар билдәле бер хаҡҡа агас ташый, унан шадрик (таҙартылмаған поташ. - **Тәрж. иҫк.**), һуңынан таҙа поташ эшләнә. Әҙерләнгән поташ баркаларҙа Түбәнге Новгородҡа ебәрелә, уны ошо эш менән махсус шөғөлләнгән чиновник, стряпчий Королев оҙатып бара. Ул ваҡыттағы хаҡ менән йыллыҡ килем 100 мең һумға етә. Был капиталдың иң ҙур өлөшө Перовский янында хеҙмәт иткән юғары чиндарға тапшырыла: башҡорт ғәскәре командующийы Циолковский һәм Балкашин йылына 10-ар мең һум табыш ала, был уларға артыҡ ҙур булмаған суммаға хеҙмәтләндерелеү шарттарында иркен һәм етеш йәшәү мөмкинлеген бирә. Урындарҙағы күҙәтеүселәргә ҙур булмаған оклад түләнә, әммә улар үҙҙәренә килем алыу юлын таба: башҡорттар килтергән бер бот көлгә 10 фунт (1 фунт - боттоң ҡырыҡтан бер өлөшө, йәғни 0,4 кг тирәһе. - **Тәрж. иҫк.**) өҫтәлеп ҡабул ителә; һалабаш, туғын һәм башҡа ваҡ әйберҙәр бракҡа сығарыла һәм түбән хаҡҡа һатып алына.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе. (Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

1945 йылдың апрель урталарына Совет Армияһы дошмандың Көнсығыш Пруссиялағы, Польшалағы, Чехословакияның үҙәк өлөшөндәге һәм Венгриялағы ҙур ғәскәр төркөмдәрен тар-мар итә. Хәҙер инде Ҡыҙыл Армия ғына түгел, союздаш ғәскәрҙәр ҙә Германия территорияһында боевой хәрәкәттәр алып бара. Беҙҙең армиялар Берлиндан 60 - 70 саҡрымда көсөргәнешле алыштарҙа ҡатнаша, ә Америка һәм Англияның алдынғы частары унан 100 - 120 километрҙа була. Союздаштар апрель уртаһында Гамбург, Виттенберг, Магдебург участкаһында Эльба ярҙарына сыға. Өс совет фронты - 1-се һәм 2-се Белорус, 1-се Украин фронттары, Одер һәм Нейсе йылғаларының уң ярҙарында һуғыша, улар биләгән рубеждарҙан һөжүм итеп, Германияның баш ҡалаһы Берлинға бәреп кереү мөмкинлеге асыла. Гитлер Германияһының тар-мар ителеүе, ундағы нацистар режимының ҡолатылыуы яҡынлаша. Илдең фашистик етәкселеге, әгәр Берлин ҡолатыла ҡалһа, шуның менән Европала һуғыштың тамамланасағын, ә үҙҙәрен халыҡ-ара хәрби трибунал хөкөм итәсәген яҡшы аңлай ине. Шуға күрә улар Совет Армияһының Берлин йүнәлешендәге һуңғы хәрби операцияһына ҡаршы тороу өсөн ашығыс рәүештә оборона һыҙығын нығытыу менән шөғөлләнде. Бында 20-40 тәрәнлегенә Одер-Нейсе оборона рубежының 3 полосаһы төҙөлә. Күп һанлы йылғалар һәм каналдар Одер, Нейсе һәм Берлин арауығындағы ҡалалар һәм башҡа тораҡ пункттары оҙайлы ваҡыт ҡаршылыҡ күрһәтергә тейеш була. Юлдарға урмандарҙан ағас ташып өйөлә, барса асыҡ урындарға ағас бүрәнәләр ергә ҡаҙып вертикаль рәүештә ултыртыла, киң һәм тәрән соҡорҙар ҡаҙыла, тимерсыбыҡ кәртәләр ҡорола. Берлин урамдарында баррикадалар төҙөлә; юл саттарында, майҙандарҙа тәрән соҡорҙарға танкылар ҡуйыла, улар дот ролен үтәй, шулай уҡ күп урамдарға артиллерия килтертелә. Тәрән подвалдар һәм махсус төҙөлгән бомбаларҙан ҡасыу урындары ғәскәрҙе һаҡлау өсөн тәғәйенләнә, Берлин метроһы селтәре уларҙың манёврҙарына ҡулайлаштырыла. Берлин янына мөмкин булған максималь көстәр һәм саралар килтерелә. Бында Германияның эске районданынан, Көнбайыш фронттан ғәскәрҙәр килә, полиция һәм һаҡ частары туплана. Берлин йүнәлешендә, Балтик диңгеҙенән Судет тауҙары армыттарын тиклемге арауыҡта дошмандың бик ҙур ғәскәр төркөмө һәм хәрби техникаһы туплана: дөйөм алғанда 1 млн. кеше, 10,4 мең орудие һәм минометтар, 1500 танкы һәм штурм орудиелары, 3300 хәрби самолеттар алышҡа әҙерләнә. Ойоштороу яғынан улар "Висла" һәм "Үҙәк" армиялар төркөмдәрен хасил итә. Берлин биләмәләре сиктәрендә 200 меңдән ашыу һалдат һәм офицерҙарҙан торған гарнизон ҡалдырыла. Немецтарҙың ҡоро ер ғәскәрҙәре командованиеһы резервында 8 дивизия була. Ғәскәрҙәр 3 миллиондан артыҡ фаустпатрон менән ҡоралллана. Был ҡулдан атып була торған реактив ҡорал, ул танкыларҙы һәм уларҙың экипаждарын сафтан сығарыу өсөн тәғәйенләнгән, немец армияһы уны 1945 йылда ҡуллана башлай. Яҡын аранан (50-100 м) ул 160-200 мм ҡалынлығындағы броняны тишә ала. Немец авиацияһы ла алда торған һауа һуғыштарында ҡатнашырға әҙерләнә, ул, башлыса, истребителдәрҙән тора. Фашистар үҙ халҡын большевиктарҙың ҡаты үс алаcағы менән ҡурҡыта, радио көнө-төнө көслө пропаганда алып бара. Ғәскәр составына "гитлерюгенд" ойошмаһы пропагандаһынан ағыуланған йәш үҫмерҙәр күпләп алына. Һуғышырға теләмәгәндәрҙе атып үлтереү, башҡа шундай каратель саралары ҡулланыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

***✓ Унын эргәһендә етди булып булманымы, кисәләрҙең һуңғы өлөшөндә ул айырыуса бирелеп уҡыған сатирик йә юмористик шиғырҙар шауҡымы көслөрәк булдымы - көлә-көлә күрештек, көлә-көлә хушлаштыҡ Риф ағай менән.***

# ҠӘЛӘМ ОСОНАН...

## йөрәк осорған шағир һүҙе



**Ишембай районы Кинйәбулат ауылы урта мәктәбендә шағир, тәржемәсе, бик күп популяр йырҙар авторы Риф Мифтаховтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған Хәтер кисәһенән һуң күңелде моңһоу уйҙар биләп алды. Әллә ниндәй һағышҡа сорналып ҡайттым ул кисәнән. Ҡайтҡас, уйҙарымды таратырға теләп, йотлоғоп Риф Мифтаховтың шиғырҙарын уҡыным. Ҡайһы берҙәрен ҡабат-ҡабат уҡыным. Хәтер кисәһендә тыуған тойғоларҙы ярһытып ҡына ебәрҙе ул шиғырҙар.**

Китап кәштәмдә байтаҡтан бирле Риф ағайҙың һабаҡташы, минең кураторым Әхмәт Сөләймәновтың "Йондоҙҙарҙан шағир йылынған" китабы тора ине. Әллә нисә тапҡыр уҡырға ниәтләндем уны - юҡ, ваҡыт бүлә алманым... Бына, ваҡыт етте: бер аҙна буйы айырыла алманым ул китаптан. Күңелемә инеп оялаған һағыштан арынырға теләгәйнем, киреһенсә, уҡыған һайын тәрәнәйә генә барҙы ул тойғо, әйтеп аңлатҡыһыҙ үкенескә әйләнде... Күңелгә яҡын ағайҙарҙы юҡһыныуҙан ғына тыуған кисерештәр түгел ул, үҙе иҫән сағында белмәйбеҙ шағир ҡәҙерен - ошо үкенес тынғы бирмәне...

Йыш ҡайтты Риф ағай тыуған яғына. Ниндәйҙер саҡырыуҙар, байрамдар көтөп торманы - ҡояш кеүек балҡып килер ине лә, ябай ғына осрашыуҙан оло байрам яһап китер ине. Унын эргәһендә һәр саҡ күңелле, рәхәт: күңелдә бер ниндәй борсолоу юҡ - ошо мәлдә барыбыҙ ҙа бәхетлебеҙ; йөрәк - ҡанатлы: үҙ шиғырҙарын да, башҡа ҡәләмдәштәренең дә күп шиғырҙарын ятҡа белгән сал сәсле шағир ағай, һәр беребеҙҙең һын-ҡиәфәтенә, холҡона йә бер ситуацияға тура килгән шиғыр уҡып, ҡанатландырып-осондороп ебәрә. Шаярабыҙ, көләбеҙ... Сиктәр юйылған, йәш айырмаһы онотолған... Әйтерһең, әле генә сәхнәнән һуғыштан ҡайта алмаған атайҙарҙы, ағайҙарҙы юҡһынып, "Өскөл хаттар" уҡылмаған, тол ҡалған әсәйҙәр, апайҙар, еңгәләр зары йөрәктәрҙе тетрәтмәгән, шағир менән бергә илебеҙ, еребеҙ, милләттәштәребеҙ, бөгөнгөбөҙ, киләсәгебеҙ, тел ҡәҙере, һүҙ ҡәҙере хаҡында уйланмағанбыҙ... Унын эргәһендә етди булып булманымы, кисәләрҙең һуңғы өлөшөндә ул айырыуса бирелеп уҡыған сатирик йә юмористик шиғырҙар шауҡымы көслөрәк булдымы - көлә-көлә күрештек, көлә-көлә хушлаштыҡ Риф ағай менән.

Ә Хәтер кисәһендә унын тыуған тупраҡ, Тыуған ил, һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙағы аслыҡ-яланғаслыҡ, намыҫ, ил-көн, туған тел яҙмышы һәм, әлбиттә, мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙары - ҡәләм осонан йөрәк осорған шағир һүҙе уҡылды. Кинйәбулат ауылы ағинәйҙәре "Бәпес көтөү" йолаһын күрһәттеләр. Риф ағайҙың атаһы Фәйзрахман ҡарттың малайы тыуыуын түҙемһеҙләнеп көтөүен, улына ниндәй өмөттәр бағлауын һәләк килештереп сәхнәләштерҙе кинйәбулаттар. Атаһы тураһында Риф ағай: "Атай үҙ заманының бик аңлы кешеһе ине. "Ағиҙел" журналында фәләнсә йылдың фәләнсә һанында фәлән яҙыусының шундай әҫәре сыҡҡайны", - тип, 80 йәшендә лә бөтөһөн дә белеп, иҫләп ултыра торғайны. Мәктәп йылдарында дәреслектәрҙә лә телгә алынмаған Мәржәни, Аҡмулла, Бабичтар тураһында мин башлап унан ишеттем", - тип һөйләй торғайны. Риф ағайҙың олатаһы ла ғәрәп, фарсы телдәрен белгән, өйөндә тоташ китапхана тотҡан, халыҡ табибы булған. Баҫма һүҙгә ихтирам, шиғри һүҙгә һөйөү атайҙан уландарға күскәндер, ахрыһы, Мифтаховтар нәҫелендә. Өскөл хаттарҙан хәреф танырға өйрәнгән Риф үҙе лә бәләкәйҙән шуҡ, теремек бала була. Башланғыс класта уны шул замандың алдынғы уҡытыусыһы, кисәге һалдат Сәйет Макарский, Ишембайҙағы 3-сө урта мәктәптә (хәҙерге Ә.-З.Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназия-интернаты) РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Лотфулла Ҡарамышев уҡыта. Тәүге уҡытыусыһы уны: "Риф ҡустым, һин яҙ, яҙ инде!" - тип дәртләндерһә, юғары кластарҙағы әҙәбиәт уҡытыусыһы: "Беҙҙең мәктәптән дә шағир сығасаҡ!" - тип, мәктәптә уҡыған йылдарында уҡ шиғырҙары "Пионер" журналында баҫылған, үҙе сатира һәм юмор оҫтаһы, һәләтле конферансье булып танылған, артист булырға хыялланған Риф Мифтаховҡа шағир яҙмышы юрай.

Бына ошондай Риф Мифтаховты мин үҙемә яңынан астым ул көндә. Район кимәлендә мәктәп уҡыусылары араһында Риф Мифтахов ижады буйынса шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе лә үтте Хәтер кисәһе сиктәрендә. Һүҙ юҡ, уҡыусылар тырышып әҙерләнгән. Саф башҡортса һөйләгән уҡыусылар менән бергә ҡала мәктәптәренән килгән урыҫлашҡан уҡыусыларҙың телдәрен вата-емерә шиғыр һөйләп тороуҙары (уларҙы, бәлки, айырым-айырым тыңларға кәрәк булғандыр) күңелде ҡырҙы-ҡырыуын, шулай ҙа бәйгеселәрҙең, уҡыусыларын сәхнәгә сығып баҫырлыҡ итеп әҙерләгән уҡытыусыларҙың тырышлыҡтарын баһаламау мөмкин түгел. Үҙҙәренә оҡшаған шиғырҙы һайлап алыу өсөн генә лә улар бит Риф ағайҙың ижады менән яҡындан танышҡан, тигән уй ҙа күңелде йылытты.

Хәтер кисәһендәге сығыштар Риф ағай Мифтахов һүҙҙәренә яҙылған йырҙар менән бергә үрелеп барҙы: "Һағындыра бит ул тыуған яҡ", "Көҙгө сәскәләр", "Тамсылар", "Гөлгөнә", "Сейәле тау"... Йырсыларҙы Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, йырсы-композитор, байтаҡ йылдар Кинйәбулат ауылы хоры етәксеһе булып эшләп, кинйәбулаттарҙың моңло күңеленә ҡанат ҡуйған Мәҙәниәт илсеһе Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы Солтанова, Риф Фәйзрахман улының ауылдашы, Башҡортостандың халыҡ артисы Альберт Шаһиев күтәреп алды. Уларға ҡушылып, зал йырланы.

Йылы хәтирәләре менән дә уртаҡлашты ҡунаҡтар. "Риф ағай менән күрешһәк, һәр саҡ бер-беребеҙҙе ауылдаш, тип сәләмләй инек", - тип һөйләне шағир Әхмәр Үтәбай. Унын тыуған ере Баймаҡ районы Буранғол ауылының икенсе исеме лә Кинйәбулат булған икән. Шағир Ишембай районынан сыҡҡан шағир-яҙыусылар, Риф Мифтахов ижады буйынса викторина үткәрҙе. Еңеүселәр "Ағиҙел" журналы менән бүләкләнде. "Киске Өфө"нөң баш мөхәррире лә буш ҡул менән килмәгәйне һүҙ ҡәҙерен белеүселәргә: Кинйәбулат мәктәбенә Башҡортостан энциклопедияһының тулы комплектын тапшырҙы. Саҡырылған ҡунаҡтар араһында Ишембай район хакимиәтенең мәғариф бүлеге етәксеһе Илшат Исмәғилевтың булыуы һәм ошо бәйгене ойоштороусыларҙы Рәхмәт хаттары менән бүләкләүе сараға мәртәбә өҫтәне.

Хәтер кисәһенә шағирҙың ҡатыны - Хөрмә апай, ҡыҙы Ғәлиә, туғандары ла килгәйне. Иң тетрәндергәне лә шул булды: Риф ағайҙың экрандағы һүрәтенә ҡарап та, унын шиғырҙары, йырҙары яңғырағанда ла күҙҙәре йәшләнеп тик ултырҙы Хөрмә апай менән Ғәлиә һылыуҙың. Атаһы тураһында хәтирәләре менән уртаҡлашҡанда күҙ йәштәрен тыя алманы Ғәлиә. Риф ағайҙың:

Улым, ҡыҙым,
һеҙгә ҡалдырамын
Иң ҙур мираҫ -
туған телемде, -

тигән юлдарының шәхсән үҙе өсөн ни тиклем ҡәҙерле икәнлеген ғәмәлдә раҫланы Ғәлиә. Күп шағир-яҙыусыларҙың балалары кеүек, ҡала шарттарында тыуып-үҫә Ғәлиә лә, әммә уларҙың күптәренән айырмалы рәүештә, атаһының һүҙенә лә, рухына ла тоғро: саф башҡортса һөйләүе барыбыҙҙы ла һөйөндөрҙө, бәйгегә килгән уҡыусыларға һабаҡ та булды унын сығышы. Ҡатынының, ҡыҙының сығыштарында Риф ағайҙың үҙен дә танып була ине: баҫалҡылар, ябайҙар. Риф Мифтахов ижа-

✔ *Йәштәр ауылға ҡайтҡан хәлдә лә, фермерҙар шунсама кешене бер нисек тә эш менән тәьмин итә алмаясаҡ. Хәҙер мәктәп балалары ла туғыҙынсы кластан һуң ҡалаға тартыла. Сөнки улар ауылда үҙенең киләсәген күрмәй.*



дының үҙе тере сағында тейешле баһаһын ала алмауының сәбәбе лә, бәлки, ана шул баҫалҡылыҡ, баҙнатһыҙлыҡтыр. Был хаҡта үрҙә телгә алынған китабында Әхмәт ағай Сөләймәнов та, "Мин һоҡланам һинең талантҡа!" мәҡәләһендә Марат Кәримов та (мәҡәлә Риф Мифтаховтың "Кояш шаһит" исемле китабына ингән) телгә ала. Ысынлап та, 7-се класта уҡыған йылдарынан уҡ әүҙем яҙышыһа ла баҫылырға ашығып бармай, студент йылдарында, сәхнәлә конференсие булып йөрөгән йылдарында ла үҙ шиғырҙарын "йәш шағир Фәтхрахманов" йә "Мостаҡ" шиғырҙары тип уҡый Риф Мифтахов. Үтә лә баҫалҡы, үтә лә баҙнатһыҙ булыуҙан бит инде был. Әҙәбиәттә ошондай миҫал тағы ла бармы икән!

Шәхси ваҡыты менән иҫәпләшмәйенсә, оҙаҡ йылдар архивта эшләп, йәшләй генә фажиғәле яҙмышҡа дусар булған Рәшит Назаровтың ижади мираҫын барлап, уҡыусыға еткереүсе лә - Риф Мифтахов. Үҙенең кем икәнлеген дә аңлауҙан уҙған шағирҙың өс китабын, ҙур күләмле ике томлығын сығарыу өсөн күпме көс, күпме ваҡыт кәрәк! Әммә Рәшит Назаров кеүек хазинаны халыҡҡа еткереү өсөн үҙүҙен йәлләмәй Риф Фәйзрахман улы. Ысын талант ҡына талантты шулай баһалайҙыр.

Кинйәбулат мәктәбен 27 йыл етәкләүсе директор Ғиниәтуллин Шайморат Сәйфулла улын да һәләтле етәксе, оҫта ойоштороусы итеп нарыҡлағы килә бөгөн. Был белем усағының йөҙө, бренды булырҙай сара үткәрҙе кинйәбулаттар. Конкурсты ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, мәктәп етәкселегенең дә, уҡытыусылар коллективының да хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Тотош коллектив менән бейеп ҡаршы алғайнылар, йырлап оҙаттылар. Сара барышында директор үҙе шиғыр һөйләп ебәрһенме, телмәрен билдәле проза йә драма әҫәрҙәренән монологтар менән биҙәп ебәрһенме - әртис тиерһең! Етәкселәрҙең ҡалыплашҡан етди образынан сығып, тап Риф Мифтаховса көләп тә, шаярып та һөйләшеүе - йәнле аралашыу - бәйгенең дә, телебеҙҙең дә бөгөн генә арттыра. Телебеҙ тап ошолай йәнле аралашыу өсөн кәрәк бит!

Ә шиғыр һөйләүселәр бәйгеһенең еңеүсеһе итеп Ә.-З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 9-сы класы уҡыусыһы Яҙгөл Хәйруллина танылды. Тән земберҙәп китте Яҙгөл "Мираҫ" шиғырын уҡығанда. Ғүмер буйы йыйған милкебеҙ - телебеҙҙең - мираҫ итеп ҡалдырылыуҡ көсө бар әле. Ошондай бәйгеләргә йыйылған ул-ҡыҙҙарыбыҙҙың күңеленә лә күсә телебеҙҙең ырыҫы һәм ҡото. Һаҡлайыҡ ошо ҡотто, быуындан-быуынға мираҫ итеп тапшырайыҡ.

**Гәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

---

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Ишембай ҡалаһынан ун саҡрымда урынлашҡан Кинйәбулат ауылына юрматы ырыуы башҡорто Кинйәбулат Аҙнағолов (1745-1813) нигеҙ һалған. Урта мәктәп, балалар баҡсаһы, фельдшер акушерлыҡ пункты, мәҙәниәт йорто, китапхана, мәсет бар. Ауыл республикабыҙ, халҡыбыҙ тормошонда ҙур урын биләгән шәхестәре менән данлыҡлы. Улар:**
**Башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре, 1918 йылдың августынан Башҡорт ғәскәренең 1-се Башҡорт уҡсылар полкы командиры һәм Башҡорт шураһы ағзаһы, штабс-капитан, сәйәси золом ҡорбаны Ишмырҙин Сөләймән Ғәләүетдин улы; хәрби эшмәкәр, Граждандар һуғышының һәм Башҡорт милли хәрәкәтенең актив ҡатнашыусыһы, штабс-ротмистр Ишмырҙин Әүхәҙи Ғәләүетдин улы; Советтар Союзы Геройы Халиков Тимербулат Ғәләүетдин улы; Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, философия фәндәре докторы Ғәлимов Баязит Сабирйән улы; заманында Ишембай, Хәйбулла, Стәрлетамаҡ, Ғафури райондары кимәлендәге беренсе етәкселәр вазифаларын биләгән, бөтә республикаға билдәле шәхестәр - Марс, Хәйҙәр, Харис, Әхәт, Ғәле Хызыр улдары Шаһиевтар, уларҙың ҡустыһы Башҡортостандың халыҡ артисы Альберт Шаһиев һәм күренекле шағир, прозаик, сатирик, Башҡортостан, Рәсәй Яҙыусылар союздары ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мифтахов Риф Фәйзрахман улы. Исемлеккә тағы ла бик күптәрҙе өҫтәргә булыр ине. Улар - хәҙерге көндә данлыҡлы ата-бабаларының эштәрен дауам итеүсе кинйәбулаттар.**
**Әйтергә кәрәк, ауыл тулы ҡанлы тормош менән йәшәй. Был бигерәк тә күренекле шағир Риф Мифтаховтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған юғарыла һүрәтләнгән хәтер һәм ҡәҙер кисәһендә нығ сағылды. Сара һуңында Кинйәбулат ауылының бер нисә арҙаҡлы шәхесе менән хәҙерге заман ауылын борсоған демографик, рухи мәсьәләләр хаҡында фекер алыштыҡ. Әңгәмәлә Башҡортостандың халыҡ артисы Альберт Шаһиев, Башҡортостандың мәғариф отличнигы, Кинйәбулат урта мәктәбе директоры Шайморат Ғиниәтуллин, ауылдың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Зөбәржәт Шаһиева, ағинәй, дини тәрбиә әүҙемсеһе Нурия Тимербулатова ҡатнашты.**

# БАШҠАЛАРҘЫ ТОҠАНДЫРЫУ ӨСӨН...

**Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә шундай күренеш күҙәтелә: телләйбеҙме-юҡмы, ауылдар яйлап юҡҡа сыға бара. Бының төрлө объектив һәм субъектив сәбәптәре бар. Күптәр, мәктәп бөтһә, ауыл бөтә, ти. Ә мәктәп ни өсөн бөтә, сөнки балалар һаны кәмей. Балалар һаны ни өсөн кәмей, сөнки йәштәр күпләп ауылдарҙан китә. Йәштәр ни өсөн ауылдарҙан китә, сөнки уларға эш урыны юҡ, һ.б. Әгәр ҙә үҙебеҙҙән генә торһа, ауылдарҙы нисек һаҡлап ҡалып була тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Зөбәржәт Шаһиева:** Мин күп йылдар ауылдың халыҡ театрында режиссер булып эшләнем. Ә бит театр булған ерҙә тормош бара. Театр эшләһен өсөн тулы ҡанлы тормош кәрәк. Хәҙер шул театрыбыҙ юҡҡа сыкты тиерлек. Ауыл йәшәһен өсөн йолаларыбыҙ һаҡланырға тейеш. Шул маҡсатта "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләйем, ниндәйҙер кимәлдә театр эшмәкәрлеген шул ойошмала булһа ла дауам итергә тырышабыҙ. Ҡалаларға киткән йәштәр ҡасан да булһа кире әйләнеп ҡайтыуына өмөт итәйек. Унда йәшәү шарты ауырлашһа ғына йәштәрҙә ауылға ҡайтырға өндәргә була. Мин ҡалаларҙағы ҡиммәтселек уларҙы кире ауылға борор тип уйлайым. Йәштәрҙең барыһы ла ҡалаларға китеп бөтмәгән әле. Шуға күрә бында ҡалғандарын тотор өсөн дә маҡсатлы эш алып барырға кәрәк. Ауыл кешеһе барыбер ҙә ергә таянып, үҙен-үҙе тәьмин итеп йәшәй ала.

**Альберт Шаһиев:** Йәштәр ауылға ҡайтҡан хәлдә лә, фермерҙар шунсама кешене бер нисек тә эш менән тәьмин итә алмаясаҡ. Хәҙер мәктәп балалары ла туғыҙынсы кластан һуң ҡалаға тартыла. Сөнки улар ауылда үҙенең киләсәген күрмәй. Күптәр колледждарға уҡырға инә, институттарға уҡырға инер ине, алған белеме буйынса юғары белемлеләр эш урыны таба алмай.

Мәктәп бөтһә, ауыл бөтә, тигән һүҙгә өҫтәп, шулай тиергә кәрәктер: ауылда эш урыны булмаһа, мәктәп бөтә, мәктәп бөтһә, ауыл бөтә. Тимәк, ауылдар унда эш урыны булмаған өсөн әйлап юҡҡа сығыуға дусар ителә. Элек алты ауылды берләштергән колхозға алты ауыл ҡарап, унда 500-ләгән кеше эшләне. Беҙҙең ауылда меңәрләгән эре мал бар ине, ваҡ малдың иҫәбе-һаны булманы. Хәҙер магазиндарға инһән, унда йөҙләгән сорт колбаса, әммә береһендә лә ит юҡ, һөт ризыҡтарында - һөт, икмәктә он бармы икән?

**Шайморат Ғиниәтуллин:** Мин ирекһеҙҙән Советтар Союзы осоро менән хәҙерге заманды сағыштырам. Ниндәй театрыбыҙ бар ине! Юҡҡа сыҡты. Уны эшләтер өсөн штат урындары, аҡса кәрәк. Театрыбыҙ булған саҡта ауылда йәшәүҙең үҙенә күрә романтикаһы ла бар ине. Ниндәй генә спектаклдәр ҡуйманыҡ та, ниндәй генә конкурстарҙа ҡатнашманыҡ. Республиканың халыҡ театрҙары араһында гран-приға лайыҡ булдыҡ. Кинйәбулат ауылының ветерандар советы рәйесе баҡыйлыҡҡа күскәйне, ул алып барған эштәр ҙә туҡталып ҡалды.

Ауылды һаҡлауға килгәндә, минеңсә, дәүләт кимәлендә ауылға ҡараш үҙгәрергә тейеш. Шунһыҙ ауыл үҙе генә үҙен һаҡлай алмаясаҡ. Мәктәп уҡытыусылары ла бөгөн балаларға белем, тәрбиә биреү урынына отчеттарға, ҡағыҙҙарға сумған. Ул отчеттарҙы бер кем дә уҡып тормай. Берҙәм дәүләт имтиханы ауыл мәктәбе балаларын ауылдан биҙҙереү өсөн уйлап сығарылған һымаҡ. Сөнки күп кенә балалар ун беренсе кластан һуң БДИ биреүҙән ҡурҡып, туғыҙҙы бөткәс, ҡалаларҙағы колледждарға китә. Шулай уҡ мәктәп балаларын сортҡа бүлеп туҡландырыу системаһы ла уҡыусыларҙы мәктәптән, ауылдан биҙҙерә.

Мәктәп бөтһә, ауыл бөтә, тигән һүҙ менән килешергә лә, килешмәҫкә лә була. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең районда мәктәптәре булмаһа ла, яңы йорттар һалынып, халҡы артып барған ауылдар бар. Улар балаларын мәктәпле ауылға автобус менән йөрөтә.

**Нурия Тимербулатова:** Мин икенсерәк уйлайым. Ауылыбыҙ әле йәшәй, уның уңған кешеләре бар. Күпләп мал тоткан, ҡош-ҡорт аҫраған кешеләр бихисап. Мәктәбебеҙ эшләп тора. Ағинәйҙәребеҙ иман һағында. Бына тигән мәсетебеҙ бар, унда гәйеттәр, ураҙа байрамдары үткәрәбеҙ. Мәктәп директоры Шайморат Сәйфулла улы 27 балаға мәсеткә уҡытырға йөрөттө. Барлығы 35 кеше гәрәпсә уҡырға өйрәндек. 1989 йылдан алып мәсетебеҙ ауылыбыҙ кешеләренә хеҙмәт итә. Тәүге иманыбыҙға 95 йәш тулды. Шуға күрә мин улай уҡ төшөнкөлөккә бирелмәйем.

**Ә бит революцияға тиклем колхоз-совхоздар ҙа, мәктәптәр ҙә булмаған көйө лә ауылдар йәшәгән. Шулай бит? Күп нәмә дәүләттән генә түгел, үҙебеҙҙән дә тора тип әйтергә була бында.**

**Зөбәржәт Шаһиева:** Дөрөҫ, күп кенә нәмә үҙебеҙҙән дә тора. Әммә заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, хәҙерге заманда лайыҡлы йәшәр өсөн тырышлыҡтан тыш, финанс та, техника ла кәрәк.

**Шайморат Ғиниәтуллин:** Бына мин үҙем Аҙнай ауылында тыуып үҫтем. Ундағы мәктәптә беҙ заманында алтмышлаған бала уҡыныҡ. Етмешенсе йылдарҙа мәктәп ябылды. Әммә ауыл йәшәй. Мәсет бар. Унда халыҡ берҙәм, егәрле, малсылыҡ, урмансылыҡ, һунарсылыҡ менән көн итә.

**Шуға бәйле һорау: ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ "Ағинәй" ҡорҙарына ойошҡайны, улар менән бергә милли кейемебеҙ тергеҙелде, милли кейем менән милли рух, ҡот ҡайтты ауылға. Ни өсөн ауылдарыбыҙҙа ир-аттар, аҡһаҡалдар ҡоро ойоша алмай. Ә бит ауылда берәр кеше баҡыйлыҡҡа күсһә, уны һуңғы юлға оҙатырға, ҡәбер ҡаҙырға, йыназа үткәрергә ирҙәр эркелеп килә.**

**Нурия Тимербулатова:** Бына беҙгә Альберт, Шайморат һымаҡ ир-егеттәр күберәк кәрәк. Шайморат Сәйфулла улы булғас, мәктәбебеҙ йәшәй. Бына беҙҙең етәксебеҙ бар, ул ағинәйҙәрҙе ойоштора, бөтә урынға алып бара. Ауылда йәшәгән һәр кем ошо рәүешле нимәлер эшләһә, һеҙмтәлә ауыл һаҡлана инде ул.

**Шайморат Ғиниәтуллин:** Мин мәктәптәге барлыҡ сараларға тиерлек ағинәйҙәрҙе саҡырам. Уларҙың беҙҙең мәктәптә йөрөүе миллион тапҡыр файҙаға ғына. Балалар уларҙың кейеменә, үҙҙәрен тотошона, һөйләшеүенә ҡарайҙар. Улар ысын мәғәнәһендәге ағинәйҙәр, милләт тәрбиәселәре. Юғиһә, уларҙы ситтән килгән кешеләрҙе йырлап-бейеп ҡаршылап йөрөүселәр генә тип ҡабул итеп өйрәнгәндәр. Был дөрөҫ түгел. Ағинәйҙәрҙең эшенән көнләшеүселәрҙең һүҙе был.

**Зөбәржәт Шаһиева:** Бер мәл мәсеттә аҡһаҡалдарға: "Әйҙә, һеҙ ҙә ойошоғоҙ", - тигәйнем, көлдөләр ҙә ҡуйҙылар. Минеңсә, ир-аттарҙы бер ҡорға ойоштороу өсөн иң тәүҙә маҡсатты билдәләргә кәрәктер. Ә маҡсат үҙ сиратында ысулдарҙы ла аҡлаясаҡ.

**Һуңғы ваҡытта илебеҙҙең аҙ һанлы халыҡтарына ҡағылған ҙур проблема: балаларҙың теле урыҫса асылыуы. Башҡорт ғаиләһендә, башҡорт балалар баҡсаһында, мәктәбендә күҙәтелгән был күңелһеҙ күренештең сәбәбен тик интернетҡа, телевизорға ғына бәйләп ҡарау дөрөҫмө?**

**Шайморат Ғиниәтуллин:** Һикһәненсе йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры Рифҡәт Гардановтың әйткән бер һүҙе күңелгә һеңеп ҡалды. Ул: "Әгәр ҙә класығыҙҙа бер башҡорт балаһы ултырып та, ҡалғандары башҡа милләт балалары икән, класс менән башҡортса һөйләшегеҙ. Башҡортостанда йәшәйбеҙ, башҡортса өйрәнһендәр..." - тигәйне. Күп осраҡта ата-әсәләр мәктәпкә, мәктәп ата-әсәләргә япһара. Йәнәһе, балаларҙың тыуған телендә һөйләшмәүенә улар гәйепле. Минеңсә, был йәһәттән мәктәп, ғаилә, йәмәғәтселек берләшергә тейеш. Әгәр ҙә ата-әсә балаһынан: "Улым, ҡыҙым, хәлдәрең нисек?" - тип һорағанда, балалары: "Аллаһҡа шөкөр" тип яуап бирә икән, ул ғаиләлә тыуған телдә һөйләшеү мәсьәләһе проблема булырына ышанмайым.

**Альберт Шаһиев:** Элек балалар ата-әсәһен тыңлай ине, хәҙер ата-әсәләр балаларын тыңлай. Әгәр ҙә балалар ата-әсәһен тыңлаһа, уларҙың теле лә үҙебеҙсә асылыр ине.

**Нурия Тимербулатова:** Балалар баҡсаһындағы тәрбиәсе йүнләп урыҫса белмәгән көйөнә балалар менән урыҫса һөйләшергә тырыша икән, бынан нимә килеп сығыры һүҙһеҙ ҙә аңлашыла.

**Альберт Шаһиев:** Бар нәмә ғаиләнән тора. Әгәр ҙә ата-әсә балаһының башҡортса һөйләшкәнен теләһә, үҙе лә тырыша, мәктәптән дә быны талап итә ала. Башҡорт теле беҙгә башҡорт булыр өсөн кәрәк. Бына мин башланғыс кластарҙа урыҫса уҡыным, сөнки мәктәп шундай ине. Атайыма "Папа" тип өндәшһәм: "Нимә тинең, тағы ла әйтһәң, ауыҙыңды йырам", - ти ине. Мәктәп урыҫса булһа ла, ғаиләлә башҡортса һөйләштек.

**Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, хөрмәтле Кинйәбулат ауылы ағинәйҙәре, ир-уҙамандары!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ ***Бына ул башын тура тотоп, миңә ҡараны, танырға теләгәндәй, ҡулын ҡашы өҫтөнә ҡуйҙы. Ирекһеҙҙән, күр мине, улыңды, тигәндәй, мин дә аяғүрә баҫтым. Бер-беребеҙгә тишерҙәй итеп төбәлдек биниһая ваҡыт.***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# Арҡалы

Хикәйә



Атайым өсөн яуап бирергә теләгәндәй, яҡындағы бөрөләре шартлап ярылырға тулышҡан ҡуш ҡайын башынан кәкүк түгелеп саҡырырға тотоноп китте. Туҡтаным, бәхәскә керергә теләгәндәй, шул яҡҡа ҡараным. "Йә, әйт әле яҡлаусы кәкүк, ят ояға баланды ҡалдырған һин, шунан беҙҙе ташлап киткән атайым, хаҡлылығыҙмы?" Ҡош телен йотҡандай тымды. "Тағы ла әйт, минең саҡырылмаған ҡунаҡтай китеп барыуым дөрөҫмө?" Ҡоштоң саҡырыуы бик оҙаҡ яҡын-тирәне моңға күмде. "Атайым һуң мине яратамы?" Кәкүк түгелеп, ҡуйырҙан-ҡуймай саҡыра. "Мин ярты етем, киләсәктә кемгә лә булһа кәрәгем бармы, булырмы?" Өмөтлө саҡырыу, мин ары ҡуҙғалғас та бик оҙаҡ артымдан оҙата барҙы. "Әлегә белеп етмәйем, әммә хәҙерҙән үк шуны һиҙәм, тормош тигәнең ҡатмарлы төшөнсә, һәр кем, әсәйем әйтмешләй, маңлайына яҙғанын ҡыуа. Ғәфү ит, яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән кәкүк, йәшә әйҙә, йәшә үҙенсә, атайым да үҙенсә йәшәһен..."

Өшөтһә лә бирешерлек түгел, ҡыҙыу атлау, урман тереклеге менән аралашыу башымды сафландырҙы, тәнемде яҙҙы, аяҡтарыма көс өҫтәне. Тау башында ла урман икән, әммә бында йылыраҡ та, яҡтыраҡ та. Ҡояш тышау буйы күтәрелеүгә Һаҡтау ауылына барып индем. Тауҙың уң яҡ ҡалҡыулығын ҡырлатып, ун биш, егерме хужалыҡтан торған ыҡсым ғына ауыл икән. Яҙ уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, бер нисә өйҙөң мөрйәһенән сыҡҡан төтөн талғын ғына һауаға күтәрелә. Йылылыҡ, яҡтылыҡ, икмәк еҫе һеңгән өйҙәрҙе күреү асығыуымды ҡабартып ебәрҙе. Хәҙер урам буйлап ҡабаланмай атлайым, бәлки, берәйһе тауыш биреп өйөнә саҡырыр? Был йәһәттән ауыл кешеләренең ғәҙәттәре яҡшы, ят булһаң да, сәләм биреп, һүҙ ҡушалар, өйҙәренә әйҙүкләйҙәр. Ана бит, ауылдың урта тошонда ҡабыҡ ҡыйыҡлы йортоноң ҡапҡаһы ауыҙына тәбәнәк буйлы, йоҡа кәүҙәле ир сығып баҫҡан. Әйтеп үткән матур ауыл йолаһына ярашлы, теге ир мине абайлағас, көтөп торғандай ҡаршыма атланы:

- Хәйерле иртә!

- Һаумыһығыҙ. - Өшөгән ирендәремде көскә яҙып мығырҙаным.

- Әйҙә, танышайыҡ, мине Айнулла ағай тиҙәр, ә һинә кем тип өндәшергә?

- Айҙар, тип...

- Ҡайҙа юл тоттоң улайтып, иртәләп?

- Ҡәнзәфәргә китеп барыла.

- Алыҫ түгел икән. - Күшеккән тауыҡтай ҡиәфәтемде күҙҙән үткәреп һораны. - Ныҡ һыуланғанһың бит?

- Шулайтылды шу...

- Ҡайҙа ҡойондоң?

- Бараҡалды аша сыҡҡанда.

- Кисеүһеҙ йылғаны кискәнһең инде, әләйгәс. - Ары һүҙ ҡуйыртмай тәҡдим итте. - Бәлки, инеп бер аҙ йылынып ял итеп алырһың, апайың да яңы ғына сәй ҡойоп ебәргәйне. - Шикләнеп, ышанмайыраҡ ҡарап тороуымды күреп өҫтәне. - Мин һеҙҙең ише балаларға сит кеше түгел, ошо ауылдың уҡытыусыһы булам, әле дәрестәр араһындағы оҙон тәнәфестә ҡайтып әйләнәйем, тигәйнем дә. Мәктәп, тигәнем, анау өйҙә урынлашҡан. - Ҡабыҡ ҡыйыҡлы йорттан йыраҡ булмаған таҡта ҡыйыҡлы өй яғына ымлап күрһәтте.

Инешләй итектәремде сискәйнем, хужа уларҙы ситән бағаналарына кейҙереп, сылғауҙарымды йәйеп элде лә үҙ алдына һөйләнде:

- Бына ошолайтһаҡ, һәйбәтерәк булыр!

Өй эсе тулы балалар икән дә баһа, береһенән-береһе бәләкәйҙәр, ят малайға, йәғни миңә аптыраңҡырап ҡарайҙар.

Өҫтәлгә ҡуйылған икмәкте умраһынан тешләп ҡабып, эҫе сәй эскәйнем эсемә йылы йүгерҙе.

- Ҡәнзәфәргә тинең дә ул, тик ҡайҙан килә ятыш? - аяҡтарын бөкләп урындыҡ түренән урын алған Айнулла ағай ҡыҙыҡһына ҡуйҙы. - Шәмсетдиндән түгелдер ҙә?

- Һабырҙан.

- Кисеүһеҙ йылғаны кискәнһең, тип әйтһәм дә Бараҡалды аша сығыуы еңелдән булмағандыр? - Тағы ла бер тапҡыр еүеш кейемдәремә күҙ атты.

- Енел булманы, йөҙөп сыҡтым!

- Боҙло һыуҙымы? Улай ашҡынып килгәсең йомошоң кисектергеһеҙҙер?

- Кисектергеһеҙ! - Көс йүгергән ҡулымды ҡылыстай һелтәнем. Йорт хужалары бер-береһенә ҡараш атып ҡуйыу менән сикләнделәр.

- Бына нимә, Айҙар, хәҙер һин кисектергеһеҙ йомошоңдо бер аҙға кисектереп, ял итеп ал, ә Ҡәнзәфәргә төштән һуң юлланырбыҙ ат менән, ауыл Советында, мәктәп директорында йомошом да бар ине.

- Юҡ, миңә хәҙер үк барырға кәрәк!

- Бик ҡабалан йөрөйһөң?

- Ҡабалан.

- Йомошоң кемдә инде?

- Атайымда.

- Атайыңда? Исеме кем һуң уның?

- Ниғәмәт!

- Бына һиңә яңылыҡ, тигәндәй, әләйгәс һин Ниғәмәт ағайҙың малайы булаһың! Уларҙың балаларын таныйым, ә һин... - Әйтеп бөтөрмәне.

Өндәшмәй башымды баҫтым.

- Улайһа,былай итәйек, беҙ һине был килеш ебәрә алмайбыҙ, һыуыҡ алдырыуың бар. Хәҙер апайың кейемдәреңде, сылғауҙарыңды үтекләп киптерер, минең эш пинжәгемде кейерһең, шулай ҡулайлыраҡ та, йылыраҡ та булыр. Ә хәҙер ныҡ итеп ашап ал, икмәктән, мундир картуфтан ҡабып ебәр, ҡайнар сәй ҙә ҡамасауламаҫ.

Былай ҙа ҡыҫтатып ултырмайым да баһа, күҙ менән ҡаш араһында оло сүгән бетәү картуфты, түтәрәм икмәкте, апаруҡ ҙур йомарлам майҙы бер үҙем йыпырҙым.

Тамағым туйғас, табынды уратып ултырған балаларҙы, шул оло балдаҡ табынды тулыландырған ир менән ҡатынды әле генә абайлағандай итеп ҡарап алдым: "Теүәл, бәхетле ғаилә, атайлы ғаилә бына ошолайыраҡ булалыр инде ул! Әсәйем дә эшсән, егәрле, тырыш, минең өсөн йәнен бирергә әҙер, әммә беҙҙең йорт атайһыҙ йорт, атайһыҙ булғас, терәкһеҙ, таянысһыҙ..."

- Ҡәнзәфәрҙә ҡалаһыңмы бөгөн? - тип ҡыҙыҡһынды Айнулла ағай.

- Юҡ, барам да тиҙ арала кире боролам! - Апай кире тағы ла иренә һынаулы күҙ атты.

- Кире боролам, тиһең, ә ауылыңа нисек ҡайтмаҡсыһың?

- Килгән юл менән.

- Ә Бараҡалды нисек аша сыҡмаҡсыһың?

- Бәлки берәй ылау осрар, осрамаһа, йөҙөп, тулҡын нисек тә теге ярға ырғытыр әле.

- Юҡ, былай бармай, ҡустым, Ҡәнзәфәргә барырһың да тура бында, беҙгә килерһең, мин һине һыбайлап теге ярға сығарырмын.

- Һеҙ бит төштән һуң Ҡәнзәфәргә бараһығыҙ.

- Ныҡ ҡабалан йомош түгел, балаларҙың эштәре, йомоштары мөһимерәк минең өсөн. Ҡәнзәфәрҙән ҡайтышлай тура беҙгә киләһең, килештекме?

Теләр-теләмәҫ кенә яуапланым:

- Килештек...

Ҡапҡа ауыҙына сыҡҡас, ҡыйыуһыҙ ғына итеп һораным:

- Ә Ҡәнзәфәрҙә, Ниғәмәттең, минең атайҙың өйө ҡайны тирәләрәк?

- Ошоғаса уның өйөндә булғаның юҡмы ни?

- Юҡ шул...

- Сәйер, бик сәйер малайға оҡшағанһың бит әле һин... Улайһа, былай, беҙҙең яҡтан барғанда тау түбәнендә Ҡәнзәфәр күренер, ә Ниғәмәт ағайҙың өйө ҡаршы яҡта күренеп тора: алты мөйөшлө, таҡта ҡыйыҡлы, урыҫ ҡапҡалы йорт. Әле Ниғәмәт ағай эшләмәй шикелле, больницанан сыҡҡан, өйҙә. Барһаң, беҙҙең ғаилә исеменән дә сәләм күндерерһең.

- Йә, эрәхмәт һеҙгә...

Бына ҡаршымда мин бер тапҡыр ҙа күрмәгән Ҡәнзәфәр ауылы. Теге йортто ҡарашым менән ауырлыҡһыҙ эҙләп тапҡас, аяҡтарым талғандай, тау битләүенә сүктем. Тегендә, ят ғаиләгә, хәҙер нимә тип барып инергә тейешмен әле: "Мин һинең ташлап киткән тыума улың булам, бына килдем әле!" - тиермемме? Ә атайым нимә тип яуап бирер, ихласлап өйөнә әйҙүкләрме, әллә ҡатынынан үтә алмай, ҡапҡа тышында ғына ҡалдырырмы, ингән хәлдә лә таныш түгел үгәй әсәй миңә ҡайһылайыраҡ итеп бағыр? Әгәр ул тышҡы ҡиәфәте, әйткән һүҙҙәре менән Хәлимәгә оҡшаһа, тағы ла ҡурҡыныслыраҡ.

Таныш түгел ауылды күҙәтеп ултырыуымды дауам иттем, сит ауыл да мине ҡабул итергә теләмәй, ятһырап тексәйгән төҫлө. Оҙаҡ суҡайҙым шулай. Зәңгәр сатырында семтем дә болот әҫәре күренмәгән көн салт аяҙ, йылы. Төшлөккә еткән яҙ ҡояшы тас маңлайымды ҡыҙҙырырға тотонды. Йөгәнөкләү яйһыҙ булғас, Айнулла ағайҙың эш пинжәген сисеп, сирәмгә түшәнем дә шунда ултырҙым.

Теге йортҡа инеүсе лә, сығыусы ла юҡ. Бына ҡыйыҡлы, бейек, ике яҡҡа асмалы урыҫ ҡапҡаһының бәләкәй өлөшө асылып китте лә унан бер ир кеше килеп сыҡты. Мыҡты уҡ булмаһа ла буйы оҙон ғына. Ир кеше ошондайыраҡ ҡиәфәттә булһын ул, һәр хәлдә, бер тотам Мәүләмбирҙе түгел. Кителгә оҡшаш яғаһыҙ пинжәк кейеп алған, тишеп төбәлгән осло күҙҙәрем алыҫ аранан күрҙеләр, шәйләнеләр, түшенә лә низер ҡаҙалған һымаҡ. Орден булырға тейеш.

Танымаҫ кешене таныным, был минең атайым, бер тапҡыр ҙа күрмәгән, мине яҡты донъяға тыуҙырған атайым! Уның яҡын, үҙ кеше икәнлеген шәүләләй төҫмөрләнем, һиҙгер күңелем менән ҡабул иттем. Атайым да күҙәтеүҙе һиҙенгәндәй, тура йөҙө менән боролоп баҫты, күр һәм мәңгелеккә танып ал, йәнәһе. Күптән түгел больницанан сығыуы раҫтыр, быуылып йүтәлләргә тотондо, йүтәлләүен ишетмәһәм дә билдән һынғандай бөгөлөп төшөүенә ҡарап, уға ныҡ ҡыйын икәнлеген белдем. Өйөнәге үтте шикелле, ҡул һырты менән ауыҙ моронон һыпырғас, ҡарашын ян-тирәһенә йүнәлтте, күҙәтеүсәнлеге, ҡыҙыҡһыныусанлығы миңә оҡшаған.

Бына ул башын тура тотоп, миңә ҡараны, танырға теләгәндәй, ҡулын ҡашы өҫтөнә ҡуйҙы. Ирекһеҙҙән, күр мине, улыңды, тигәндәй, мин дә аяғүрә баҫтым. Бер-беребеҙгә тишерҙәй итеп төбәлдек биниһая ваҡыт. Шул һирпелешеп алыуыбыҙ бер ғүмерҙәй оҙон тойолдо. Атайым тағы ла быуылып йүтәлләп алғас, хушлашып, минең тарафҡа ҡулын болғағандай итте лә ҡапҡаһы эсенә инеп юғалды. Шулай итеп, икебеҙ араһын бүлгән ҡаршылыҡ артына инеп боҫто атайым. Тағы шуны күҙалланым: был беҙҙең беренсе һәм һуңғы осрашыуыбыҙ, былайтып башҡаса һис ҡасан ҡапма-ҡаршы баҫып, һүҙһеҙ текәлешеп тормаясаҡбыҙ, ул минең ҡарашымдан мәңгегә юйыласаҡ, билдәһеҙлеккә китеп юғаласаҡ, иртәнге томандай тараласаҡ. "Мин һине ғәфү итәм, атай, йәшә, донъяла барлығыңды белеү үҙе үк бәхет, һине киләсәктә эсемдән булһа ла һис ҡасан яманламаясаҡмын, ҡарғамаясаҡмын, бая юлда килә ятҡанда ташлаған ғәйептәремде кисерә алһаң, кисер. Ниндәй генә хәлдә лә һин минең атайым булып ҡалаһың..." Ирендәрем ирекһеҙҙән ошо һүҙҙәрҙе шыбырҙанылар. Енел һулап ҡуйҙым. Ҡәнәғәтлек, күңел тыныслығы кисергәндәй, ҡайтыр яҡҡа ҡарай ҡайырылдым.

Кире ауылға ҡайтып ингәнемдә ҡояш байымағайны әле. Ауыл осондағы юл сатына ярпайып баҫҡан әсәйем минең яҡҡа өңөлөп ҡарап торҙо ла, танығас, ҡаршыма йүгерә башланы, быуыңһыланып, бер нисә тапҡыр йығылып та китте, эргәмә килеп сүгеп ҡосаҡлағас, сенләп илап ебәрҙе:

- Ҡайҙа йөрөйһөң быға?

- Һеҙ үҙегеҙ һуң, именһегеҙме? - Һорауға һорау бирҙем. Әсәйемдән бер аҙым ҡалмай сабыулаған Алғыр тирле маңлайымды, күҙҙәремде, биттәремде алмаш-тилмәш яларға кереште.

- Беҙҙе ҡайғыртҡан була тағы, һине эҙләп, тотош ауылды аяҡҡа баҫтырҙым, Мәҙинә апайын, Лена, Валера бошоналар, Лида илаулай, класташтарың һаҡмар яғында һине эҙләйҙәр, ҡалғандар Сейәле Түндә, Аҡташта...

- Әсәй, мин атайымды барып күрҙем, уның донъяла барлығына ышандым.

Беҙҙең менән бергә йәшәмәһә лә минең күңел терәгем булған тере атайым бар, атайым булғас, мин - арҡалы бала!

**(Аҙағы. Башы 41-44-се һандарҙа).**

✓ ***Улар икенселәрҙең ҡаҙаныштарын үҙҙәренә күсереү менән дә шөғөлләнмәй. Был - милләттең йөҙө. Тимәк, ансамбль үҙенең тамашасыларын юғалтмаясаҡ, уның абруйы ҙур.***



СИТ-ЯТТАР ШУЛАЙ ТИ!

**Өфөлә "Бейеү - ул халыҡ күңеле" хореография сәнғәте фестивале тамамланды. Унда төрлө төбәктәрҙән үҙ халҡының йөҙөк ҡашы һаналған коллективтар ҡатнашты. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән Дағстандың "Лезгинка" ансамбле ҡатнашлығында үткән йомғаҡлау концерты "Бейеү - ул халыҡтың йәне" фестиваленең дүртенсе финал концерты булып тора. Ошо ҙур сара айҡанлы матбуғат конференцияһы ла уҙғарылды. Унда хөрмәтле ҡунаҡтарҙың береһе - Дағстандың "Лезгинка" дәүләт академия бейеү ансамбленең етәксеһе һәм генераль директоры, РФ Президенты эргәһендәге мәҙәниәт һәм сәнғәт советы ағзаһы, Рәсәйҙең Милли профессиональ ижади коллективтары берлеге рәйесе Джамбулат Мусаевич МАГОМЕДОВ сығыш яһап, башҡорт бейеү сәнғәтенә юғары баһа бирҙе. Түбәндә - уның сығышынан өҙөк.**

# ФӘЙЗИ ҒӘСКӘРОВ АНСАМБЛЕ...

## яҡтылыҡ тарата белә!




- Рәсәйҙә төрлө фестивалдәр йыш үтеп тора, шуға бының менән берәүҙе лә ғәжәпләндереп булмай. Ләкин Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле ойошторған "Бейеү - ул халыҡтың йәне" фестивале - донъяла берәү генә. Исеме менән дә, йөкмәткеһе менән дә ул ҙур эштәргә саҡырыу булып тора, ошо оранды власть әһелдәренең дә, халыҡтың да аңлауы мөһим. Мин шәхсән тап ошо фестивалдең ғүмерле булыуын теләйем. Уның артабан да йәшәүе, гөрләүе сәнғәт кешеләре өсөн уғата ҡиммәт.

Бөйөк хореограф Фәйзи Ғәскәровтың иҫтәлегенә үткәрелгән фестивалде тәүәккәл аҙым, ҡыйыу саҡырыу, тип атар инем. Сөнки Фәйзи Ғәскәров - Башҡортостандың ғына түгел, бөйөк СССР-ҙың, Рәсәйҙең байлығы һәм ҡаҙанышы. Һәм шулай булып ҡаласаҡ. Был фестивалде ойоштороп, ансамблдең тәүге художество етәксеһенә, ул булдырған ғәжәйеп хореографияға, коллективҡа һалған үҙенсәлегенә рәхмәт әйтәбеҙ.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамблен берәү менән дә бутау мөмкин түгел. Мәҫәлән, Кавказда йәки берәй башҡа төбәктә, ҡайһы бер бейеү коллективтарын ҡарайһың да, уларҙың үҙенсәлеген таба алмайһың, айырып алыу мөмкин түгел - бер иш хәрәкәт, оҡшаш композиция. Фәйзи Ғәскәров булдырған коллектив үҙенсәлеге менән һоҡланғыс. Әлегә тиклем улар ошо данды лайыҡлы һаҡлай һәм байыта ғына бара, үҙҙәренең ерен, ошо ерҙең традицияларын хореография телендә иҫ китерлек итеп башҡара. Был почерктың, индивидуаллектең һаҡланыуында бөгөнгө етәкселәрҙең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Улар икенселәрҙең ҡаҙаныштарын үҙҙәренә күсереү менән дә шөғөлләнмәй. Был - милләттең йөҙө. Тимәк, ансамбль үҙенең тамашасыларын юғалтмаясаҡ, уның абруйы ҙур. Ошо коллективҡа ҡарап, беҙ Башҡортостан ниндәй бөйөк, уның ниндәй көслө сығанаҡтары бар, сәнғәтендә ниндәй тәрәнлек, тип һоҡланабыҙ, аптырайбыҙ.

Ошо һоҡланыу, аптырау сәнғәттең көсөн күрһәтә, ләкин ҡәҙимге тормошта артистар һис тә әрһеҙ түгел, үҙҙәрен ҡай саҡ яҡлай ҙа белмәй улар. Репетиция майҙанынан тыш, гастролдәр графигынан тыш, тормошта ауыр яраҡлашалар. Һынауҙарға ҡаршы тора алмауҙары бар. Ниндәйҙер ҡатмарлы, көсөргәнешле хәлдәрҙә баҙап ҡалалар, шуға ла уларға һаҡсыл мөнәсәбәт кәрәк. Үҙҙәренә ярҙамға килгәндәргә улар рәхмәтле була белә.

Был коллектив иң тәүгеләрҙән ЛХР-ҙа (ЛНР) булып ҡайтты. Шул саҡта һөрөмлө яҡтарҙа сығыш яһауҙың ни тиклем кәрәклеген бөтөн ил күреп инанды. Был сараларға әсәләр, балалар, ҡатындар иң матур кейемдәрен кейеп килделәр. Артистарҙы сәхнәнән ебәрмәйҙәр, илайҙар, рәхмәт әйтәләр. Коллектив уларға бәхетле мәлдәр бүләк итте. Үҙҙәренең ҡыйыу юл сәфәрҙәре менән Фәйзи Ғәскәров ансамбле яҡтылыҡ тарата белә.

"Бейеү - ул халыҡтың йәне" фестиваленең әһәмиәте арта ғына бара. Тимәк, алда уның географияһын киңәйтеү мәсьәләһе лә тора. Ошо фестиваль күҙлеге аша халыҡтар бер-береһенең мәҙәниәте, халыҡ хореографияһы менән таныша. Илебеҙ етәксеһе Владимир Путин халыҡтарҙың берҙәмлегенә саҡыра. "Бейеү - ул халыҡтың йәне" фестивале тап ошо маҡсатҡа тура килә. Беҙ Башҡортостандан был ергә, ундағы халыҡҡа, халыҡтың тарихына һөйөү менән ҡайтып китәбеҙ. Ҡайтҡас, үҙебеҙҙә ошо ҙур сара тураһында һөйләйәсәкбеҙ, идеяны шәм һымаҡ тотоп, алға барасаҡбыҙ.

Рәсәй халыҡтарының мәҙәниәте иҫ киткес бай һәм ҡыҙыҡ. Ойоштороусылар үҙҙәре лә, бәлки, фестивалдең шундай ҙур әһәмиәтен аңлап бөтмәйҙер, ләкин унда ҡатнашҡандар был турала ҡат-ҡат һөйләйәсәк, шул саҡта уны аңлау тәрәнлеге лә киләсәк. Фестивалде ойоштороуҙың сифатын һаҡлау мөһим. Әле ул шул тиклем юғары кимәлдә үтә. Ошо статусты артабан да күтәрә барырға кәрәк, шул саҡта барлыҡ коллективтар ҙа Өфөгә ынтылып торасаҡ.

Бөйөк хореограф, етәксе Фәйзи Ғәскәров иҫтәлеген мәңгеләштереү эше дауам итергә тейеш. Уны онотorға хаҡыбыҙ юҡ. Әгәр ҙә бөйөк шәхесте урыҡ-һурыҡ, өҙөк-йыртыҡ ҡына ниндәйҙер юбилейы мәлендә генә иҫкә төшөрһәк, тарихҡа, мәҙәниәткә ҡарата һөйөү тәрбиәләй алмаясаҡбыҙ. Улар Фәйзи Ғәскәровтың тормош юлын, эшмәкәрлеген, ижадын, мәҙәниәткә, хореографияға индергән өлөшөн белергә тейеш. Ғәскәров индергән "әлифба"ны ғына түгел, ошо "әлифба"ны уның нисек итеп яҡлап-һаҡлап, нығытып ҡала алғанын да яҡшы белергә тейеш. Тап ошо ҡаҙаныштарға нигеҙләнә бөгөнгө башҡорт мәҙәниәте хазиналары. Улар Башҡортостандың ғына түгел, тотош Рәсәйҙең уңышына, ғорурлығына әйләнде. Беҙ ҙә үҙ сиратыбыҙҙа "Бейеү - ул халыҡтың йәне" фестивале тураһында Рәсәйҙең һәр мөйөшөндә һөйләп, уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятып йәшәйәсәкбеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА
яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# БЕР ТӨРЛӨ ҺӨЙЛӘЙҘӘР...

## икенсене эшләйҙәр

**Һәр атҡан таңым менән күңелгә ниндәйҙер шиғыр юлдары килә. Бына әле, май байрамдары көндәрендә, Мостай Кәримдең 1941 йылда яҙған ошо шиғыр юлдарын иҫкә төшөрҙөм:**

**Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,
Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,
Гүзәллеген һаҡлап Иҙелдең,
Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн -
Мин фронтҡа китәм иптәштәр...**

Был шиғыр беҙҙең йәштәшебеҙ. Эйе, шундай ҡурҡыныс, әммә юғары илһөйәрлек рухы хөкөм һөргән йылдарҙа тыуғанбыҙ беҙ. Ә бына бөгөн, күпме ҡорбандар биреп яуыз дошманды, фашизмды еңгән халҡымдың ниңәлер рухы һүнә бара кеүек. Ә бит был хәл бөгөн генә түгел, 1970 йылдарҙа уҡ күҙәтелә ине.

Иҫемдә, 1972 йылда Мәскәүҙә уҡыуымды тамамлап, диплом тотоп, Өфөгә ҡайттым. Уңға, һулға бәреләм, эшкә урынлаша, торлаҡ таба алмайым. Бер көндө уҡытыусымдан кәңәш һорарға барҙым һәм: "Ағай, һәйбәт кешеләр күренмәй, ҡайҙа юғалды улар?"- тип һорамай булдыра алманым. Уҡытыусы ағай көрһөндө лә: "Мәскәүҙә, Третьяковка музейында Ивановтың "Явление Христа народу" картинаһын күрҙеңме?"- тип һораны. "Эйе, бер ҙур стенаны биләп эленеп тора ул, ә бүтән стеналарҙа шул әҫәргә йыйылған төрлө йөҙҙәрҙең эскиздары эленгән", - тинем. Уҡытыусым: "Бына шул эскиздарҙың атамаларына иғтибар иттеңме, "Үкенеүсе", "Икеләнеүсе", "Ҡурҡыусы" һ.б. Бына шундайҙар ғына ҡалды шикелле беҙҙең тормошта ла. Күңелдәргә ҡурҡыу, икеләнеү хисе инеп урынлашты..." - тип тамамланы уҡытыусым һүҙен.

Эйе, рухты күтәреү өсөн йыш ҡына шиғыр уҡып алам. Йә булмаһа, шулай уҡ юғары рух менән һуғарылған матур бала саҡ ваҡиғаларын иҫкә төшөрәм. Хәтеремдә, бик кескәй саҡта "Минең уйымды әйт" тигән уйын уйлап сығарғайныҡ. Ҡыҙыҡ уйын ине ул, сөнки ул ышанысҡа ҡорола ине. Уйынды алып барыусы һиңә һорау бирә, үҙе үк яуабын да ҡабатлай, дөрөҫ яуапты инҡар итергә ярамай. Әлбиттә, беҙҙең бөтөн уй-һорауҙар Чапай, Буденый, Гитлер, фашист, һуғыш, Еңеү, йондоҙ кеүек һүҙҙәргә бәйле ине. Яуап бирә алмаһаң, уй уйлаусы: "Йә, әйт, улайһа, яҡшы кешеме, әллә насар кешеме?" йәки "Насарлыҡмы, әллә яҡшылыҡмы?" тип ярҙам итеп тә ебәрә ине.

Бала саҡ уйыны ышанысҡа ҡоролғайны. Ә бөгөн ышаныс тигәндең бер нимәһе лә ҡалмай бара түгелме? Ышанып таянырҙай закондар ҙа юҡ һымаҡ илебеҙҙә...

Эйе, әленән-әле бала саҡты иҫкә төшөрөп, бала саҡ хәтирәләре менән йәшәлә. Ышанысҡа, тоғролоҡҡа, сафлыҡҡа ҡоролғайны ул саҡта беҙ уйнаған уйындар. Ә бына әлеге "уйын ҡороусылар" бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй, өсөнсө төрлө эш башҡара. Ышаныс юҡҡа сыға...

**Айгөл АХУНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЙҺЫ САҠТА...

## илау ҙа яҡшы

■ Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һүн йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Илау сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип белдерә табиптар. Күҙ йәше илаусыларҙың хәлен күпкә яҡшыртырға мөмкинлек бирә, әммә бар нәмәлә лә сама кәрәк. Тик нисек "дөрөҫ" иларға һуң? Күҙ йәше менән организм үҙен ауыртыу һәм стрестарҙан ҡотҡара. Әгәр ҙә кеше тойғоларын сығармай һәм күҙ йәштәренә ирек бирмәй икән, был тиҙ ҡуҙғып барыусанлыҡҡа, ярһыусанлыҡҡа килтерә. "Эмоциональ көсөргәнеш менән бергә организмда химик матдәләр ҙә үҫешә һәм күҙ йәштәре менән бергә сыға. Әгәр ҙә көсөргәнеш менән көрәшмәһән, был йөрәк өйәнәгенә хәүефен арттыра, баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәренә зыян килтерә", - ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Уильям Фрэй. Статистикаға ярашлы, илап алғандан һуң кешеләрҙең 88, 8 проценының хәле күпкә яҡшыра. Күҙ йәштәрендә пролактин тигән гормон бар, ул эмоциональ көсөргәнеште юҡҡа сығара һәм иммунитетты нығыта. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа ирҙәргә ҡарағанда пролактин күберәк, ә ауырлы саҡта ул тағы ла арта. Шулай итеп, илау - бик файҙалы. Тик йыш илау шулай уҡ дөрөҫ түгел. Эмоцияларҙы нормала тотоу өсөн аҙнаһына бер тапҡыр илап алыу ҙа етә.

■ Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

■ Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәслек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙыныгыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Бигерәк тә яҙғы ҡояш аҫтында һаҡ булығыҙ, был осорҙа тирегә зыян килеүе бар. Шулай уҡ ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар, онкологтар фекеренсә, солярийҙарға йөрөү ҙә тире яман шешенә килтерә. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиренең ҡояшҡа тәьҫирен көсәйтеүен оноторға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйөр өҫтө биҙе гормондары инә.

ТУҒАН ТЫЛ

# МУНСАЛЫ ЛА БУЛДЫЛАР

**Бөгөнгө көндә илебеҙ халҡы берҙәм булып Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға төрлөсә ярҙам итә. Әбйәлил районы халҡы ла гуманитар ярҙам ойоштороу эштәренә дәррәү ҡушылды.**




Әбйәлил районының иң матур ауылдарының береһе булған Ҡаҙмашта берҙәм, татыу, дәррәү халыҡ йәшәй. Улар матур инициативаларҙы күтәреп алып, бер-берелән дәртләндереп, оҙаҡҡа һуҙмайынса эшләп тә ҡуя. Быйыл, мәҫәлән, ҡаҙмаштар "Айыҡ ауыл" республика конкурсына ҡушылып, уның сиктәрендә бик күп эштәр башҡара, саралар үткәрә. Бөтә был эштәрҙең башында ауылдың шәп, уңған егеттәре тора. Улар - Вадим Абдуллин, Азат Сафиуллин, Насырйән Агилов, Айтуған Абдуллин, Ринат Сафиуллин, Зариф Атауллин һәм Ансар Таһаув. "Ауылым", "районым", "халҡым" тип янған егеттәрҙең һәр береһе тормошта үҙ юлын табып, матур итеп донъя көтә, төрлө урындарҙа уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Нәҡ ошондай аяҡтарында ныҡ баҫып торған, үҙҙәренең башҡарған эштәре өсөн яуаплылыҡ алырға ҡурҡмаған, маҡсаттарына ынтылыусан ир-ат ҡулында республикабыҙ, илебеҙҙең киләсәк яҙмышы.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы ауылдаштарынан мунса кәрәклеге тураһында хәбәр алғас та егеттәр был мәсьәләне хәл итеүҙе үҙ өҫтөнә ала.

- Мунса эшләү тураһында ҡарар ҡабул ителгәндән һуң дәррәү эшкә тотондоҡ. Мунсаны эшләүгә теүәл ике көн китте. Егеттәрҙең кемеһелер ағас әҙерләне, икенселәр иретеп йәбештерҙе, өсөнсөләр Магнитогорск ҡалаһынан тәҙәләштә кәрәк башҡа әйберҙәрҙе алып килде. "Күмәкләгән - яу ҡайтарған", ти халҡыбыҙ. Берҙәм булғас, эшебеҙ ҙә тиҙ ыраны, еңел барҙы.

Бындай эш, әлбиттә, ҙур сығымдар талап итә. Шуға күрә аҡса йыйыу тураһындағы иғланға тиҙ арала ҡушылған һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тейешле сумманы йыйған ауылдаштарыбыҙға, шулай уҡ мөһим эштән ситтә ҡалмаған Үтәгән ауылы халҡына ҙур рәхмәт. Һәр кем хәленән килгәнсә аҡсалата ярҙам күрһәтте, ҡул ярҙамы ла етерлек булды.

Былтыр ҙа ноябрь айында ике мунса эшләп, егеттәргә алып барғайныҡ, теүәл бер йылдан һуң тағы ла бер мунса, башҡа төрлө гуманитар йөк менән юлға сыҡтыҡ. Әле мунсаны алып барып еткереп, егеттәргә тапшырҙыҡ. Шулай уҡ туғандары, ауылдаштары һәм райондаштары ебәргән кҫтәнәстәрҙе лә алып ҡыуанды улар. Мунса һәм гуманитар ярҙам өсөн барыһына ла оло рәхмәттәрен белдереп ҡалдылар, - тип хәбәр итте Вадим Рәфҡәт улы Абдуллин.

Республиканан ситтә лә киң билдәле һәм барыһының да ятраҡан "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамын башлап ебәреүсе ҡаҙмаштар әлеге көндә лә күптәргә үрнәк булырҙай эштәр башҡара, заман менән бергә атлай, илһөйәр балалар үҫтерә. Артабан да уларҙың мөһим һәм әһәмиәтле эштәре тураһында ишетербеҙ әле.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# МАЛАЯҘ УҘАМАНЫ ЛА...

**Салауат районының Малаяҙ ауылында Хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы етәксеһе Рөстәм Хөснуллин МХО яугирҙарына 15-се күсмә мунса әҙерләй.**



Ул алыҫ 2015 йылда уҡ Донбасс ерҙәренә барып ҡайта. Украина тарафтарында хәл-ваҡиғалар киҫкенләшеп киткәндән һуң, зыян күргән халыҡҡа ярҙам күрһәтә, бынан тыш, Бөйөк Ватан һуғышында башын һалған батырҙарыбыҙҙың әҙҙәре буйлап йөрөй. "Гуманитар йөк ташыныҡ. Шул ваҡытта уҡ сәйәси ваҡиғалар киҫкенләшкәйне. Махсус хәрби операция башланғас, Афған һуғышын үткән ветеран булараҡ, яугирҙарға ярҙам итеүҙе үҙемдең төп бурысым итеп күрҙем. Ошо көнгәсә ул тарафтарға 31 тапҡыр барып ҡайттым", - ти Рөстәм Хөснуллин.

МХО башланғас та ветеран үҙенең ҡапҡа алдын ҙур оҫтаханаға әйләндерә. Яугирҙарға 14 мобиль мунса әҙерләп, алғы һыҙыҡҡа оҙата, ҡайһыларын үҙе алып бара. Бынан тыш, халыҡ менән бергә егеттәр өсөн машиналар һатып алып ремонтлай. "Бөгөн 15-се мобиль мунсаны әҙерләйбеҙ. Тәүге мунсаларҙы әҙерләгәндән һуң, һалдаттар үҙҙәре һорап мөрәжәғәт итә башланы. Улар бит икешәр ай буйы мунса күрмәй. Әле "Өфө" позывнойлы яҡташым, ағай, ярҙам ит инде, тигәс, тағы эшкә тотондом. Мунсаларҙы әҙерләргә райондаштар, хәрби хәрәкәттәр ветерандары әүҙем ярҙамлаша: кемдер - аҡсалата, кемдер - төҙөлөш материалдары менән. Ауыл ир-егеттәре мунсаларҙы ҡорорға ярҙам итә. Район эшҡыуары, Хәрби-диңгеҙ флоты ветерандары союзы рәйесе Исрафил Хаировҡа айырыуса ҙур рәхмәт" - ти уҙаман.

Рөстәм Хөснуллин утыҙ йылдан ашыу ғүмерен йәш быуынды уҡытыуға бағышлаған. Бөгөн Дыуан күп профилле коллед-

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# БИРЕШМӘЙЕМ, ТИҺӘҢ...



**Көҙ, йылдағыса, һалҡын тейҙереүҙән һәм төрлө вирустарҙан сирләй торған осор инде ул. Быйыл, етмәһә, йылы мәлдең ҡапыл ғына ҡышҡыса һалҡын көндәргә күсеүе лә вирустарҙың әүҙемлегенә килтерәсәк. Рәсәйҙең 16 төбәгендә дауахананан тыш пневмония менән сирләүселәр һанының артып китеүе сәбәптәрен табиптар тап ана шул һауа торошондағы температура тирбәлеше менән бәйләй ҙә инде. Белгестәр, төрлө ағзаларҙы зыянлауына ҡарамаҫтан, пневмония менән менингиттың үҙ-ара оҡшаш билдәләре хаҡында һөйләнә.**

### Пневмония

Был үпкәләрҙәге ҡыуыҡтарҙың (альвеола) шыйыҡса йәки эрен менән тулыуына килтерә торған йоғошло сир. Ә был иһә үҙ сиратында ҡакырыҡлы йөтәлләү, өшөү, тән температураһының көсәйеүе һәм тын ҡыҫылыуға килтереүе ихтимал. Пневмонияны ҡуҙғытыусы бактерия - ул пневмококк. Был сир шуның менән дә ҡурҡынысл: тейешенсә дауаланмаған осраҡта ул ҡайһы бер ауырыуҙарға, айырыуса хәүеф ихтималлығы төркөмөндәгеләр өсөн ҡатмарлашыуҙарға алып килеүе бар. Улар араһында бактериемия (бактерияларҙың ҡан йөрөү системаһына үтеп инеүе), тын ҡыҫылыу, плевраларҙағы шыйыҡсаның күбәйеүе, үпкә абсцессы. Бынан тыш, һуңғы йылдарҙа пневмококктарҙың антибиотик тәьҫиренә бирешмәй башлауы ла хәүеф тыуҙыра. Пневмококк пневмонияһы менән бигерәк тә ике йәшкә тиклемге балалар сирләүсән. Тап шул сәбәпле пневмококк инфекцияһына ҡаршы иҫкәртеүсе вакциналар Милли календарь буйынса 5 йәшкә тиклемге бөтөн кескәйҙәргә лә эшләнергә тейеш, сөнки был йәш төркөмө сирҙе ауыр кисерә һәм хатта үлем осраҡтары ла була. Ә инде өлкән йәштәгеләргә прививка айырым осраҡтарҙа ғына яһала.

### ОРВИ һәм грипп

Киҫкен респиратор вирус сирҙәре йышыраҡ өҫкө тын юлдарын зарар-

✓ **Ысын мәғәнәһендә көслө һәм сәләмәт, тотороҡло кеше кәрәкмәгәндә ҡысҡырып һөйләшмәй, ирешмәй һәм жаргон һүҙҙәрҙе ҡулланмай. Сөнки ул уның һүҙҙәре былай ҙа әһәмиәтле булыуын аңлай.**



жының Малаяҙ филиалында эшләй. "Эштәребеҙҙе "Атайсал" проектында теркәнек. Республика Башлығы Радий Хәбировтың башланғысы менән булдырылған проекттың халыҡҡа файҙаһы бик ҙур. Радий Фәрит улы МХО башланыу менән егеттәргә ҙур ярҙам күрһәтә, үҙе лә даими рәүештә яугирҙар янына барып тора. Ошоноң өсөн уға оло рәхмәтебеҙҙе еткерәм", - ти Рөстәм Нәбиуллә улы.

Рөстәм Хөснуллин йәнә алғы һыҙыҡҡа әҙерләнә, һалдаттар өсөн иң кәрәкле ярҙам йыйыла - тәгәрмәсле мунсалар, УАЗ "буханкаһы", эш ҡоралдары һәм башҡа кәрәк-яраҡтар. Уға имен-һау йөрөп ҡайтыуын теләйек!

## ТАНҺЫҠ КҮСТӘНӘСТӘР, МИНДЕК...

**Хәйбулла районынан МХО зонаһына сираттағы гуманитар ылау юлға сыҡты.**

Район халҡы яугирҙарға ике "УАЗ" һәм бер "Нива" автомобилдәре, радио-электрон көрәш сараһы, "Булат-4" ҡулайламалары, генераторҙар, шөрөп борғостар, ирете-йәбештереү аппараты, бензин бысҡылары, маскировкалау селтәрҙәре, миндектәр, портатив газ плитәһе, шәхси гигиена, көнкүрештә ҡулланыу кәрәк-яраҡтары, аҙыҡ-түлек (тушенкалар, салаттар, тоҙламалар, картуф), кейемдәр һәм яугирҙарға ҡатмарлы шарттарҙа кәрәкле башҡа әйберҙәр оҙатты. "Ғаилә" үҙәге белгесе Филүзә Ишемғолова һөйләүенсә, гуманитар ылауҙы район башлығы Рөстәм Шәрипов үҙе оҙатып бара. "Гуманитар ылау менән бергә 25 маскировка селтәре ебәрҙек, ауыл халҡы аҙыҡ-түлек, быҡтырылған ит һәм салаттар һалды. Мәскәүҙән Дмитриевтар ғаиләһе ҙур өлөш индерҙе, улар беҙгә 196 мең һумлыҡ ярҙам ебәрҙе. Һалдаттарҙың һорауы буйынса бөтә кәрәк-яраҡтарҙы һатып алдыҡ", - тине Филүзә Ишемғолова.

Районның "Туған тыл" ирекмәндәр берекмәһе яугирҙарға окоп шәмдәре әҙерләгән. "Беҙҙең район үҙәгендә окоп шәмдәре производствоһы, теген цехы булдырылған. Бөгөн МХО биләмәһендә иң кәрәклеһе - ул дронға ҡаршы юрғандар, беҙ уларҙы егеттәрҙең үтенесе буйынса тегә башланыҡ. Шулай уҡ үҙебеҙ теккән балаклаваларҙы, тактик носилкаларҙы ебәрҙек", - тип һөйләне ирекмәндәр берекмәһе етәксеһе Юлиә Ғәлиева.

Әйткәндәй, Хәйбулла районының Йәнтеш ауылы аҡһаҡалы, хеҙмәт ветераны Юныс Иштанов МХО зонаһына ҡайын миндеге, шифалы үләндәр һәм артыш ботаҡтары ебәргән. "Йәйен "Башҡортостан" полкы егеттәренә 70 ҡайын миндеге һәм туҙы, артыш ботаҡтары, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә һәм башҡа үләндәр ебәрҙем. Бындай ярҙам бик кәрәкле. Мәҫәлән, ҡайын миндеге менән сабыныу бик файҙалы, ул иммунитетты һәм ҡан әйләнешен яҡшырта. Күп ауылдаштарыбыҙ яуҙа йөрөй. Үҙебеҙҙең улыбыҙ ҙа оборона министрлығы менән контракт төҙөнө", - тип һөйләне Юныс Рәхимйән улы.

## ИРЕКМӘН - АЛҒЫ ҺЫҘЫҠТА

**Республикабыҙ йәштәренең бер төркөмө гуманитар миссия менән Курск өлкәһенә юлланды. Улар яугирҙарға һәм халыҡҡа нисек ярҙам итә, ниндәй ауырлыҡтарға осраған? Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Башҡортостан бүлексәһе координаторы Рөстәм Сәләхетдинов "Башинформ" журналисына ошо хаҡта һөйләне.**

- Августа украиндар Курск өлкәһенә һөжүм иткән ваҡытта беҙ Воронежда "Рубеж" форумында инек. Сараны алдан тамамларға мәжбүр булдыҡ. Мин ошо уҡ айҙа Курскиға юлландым. Халыҡҡа ҡулдан килгәнсә ярҙам иттек: ашаттыҡ, кейемдәр бирҙек, кәсенергә ярҙамлаштыҡ, - ти ирекмән. - Әле хәрби госпиталдәрҙең, гуманитар штабтарҙың эшен ойоштороурға ярҙам итәбеҙ.

Рөстәм әйтеүенсә, Өфө студенттары хәрби хәрәкәттәр барған урындан 100-120 саҡрым алыҫлыҡта ғына эшләй. Күбеһе МХО-ла ҡатнашҡан яҡындарына ярҙам итеү өсөн, ә ҡайһылары күңел ҡушыуы буйынса килгән.

- Ҡайҙа ниндәй ярҙам кәрәк, шунда эшләйбеҙ. Мәҫәлән, тәүге көндәрҙә ике тәүлек буйы 15 тонналыҡ фураларҙы бушаттыҡ. Уларҙы ҡапсыҡтарға бүлеп, халыҡҡа таратабыҙ. Хәүефле урындарға ирекмәндәр хәрбиҙәр менән бергә бара. Кешеләрҙең ҡыуаныслы йөҙөн күреү - беҙҙең өсөн иң ҡиммәтлеһе. Халыҡ рәхмәт әйтә. Ирекмәндәрҙең берененң ире, Курск эшҡыуары килеп беҙҙе пицца менән һыйланы, - тип дауам итә ирекмән. - Бер нисә көн рәттән госпиталдә эшләйем. Алғы һыҙыҡтан яралыларҙы ҡабул итәбеҙ, ярҙам күрһәтәбеҙ, операцияға әҙерләйбеҙ. Һуңынан палатаға илтеп ҡуябыҙ. Беҙҙең яугирҙарҙың һынауҙарҙы нисек күтәреүен күрһәгеҙ ине! Беҙ ҙә уларға терәк булырға тырышабыҙ. Яралылар менән донъя хәлдәре хаҡында һөйләшәбеҙ.

Егет республикаға ҡайтҡас йәштәр менән осрашырға һәм уларға ирекмәндәрҙең Курскиҙағы эше хаҡында һөйләргә планлаштыра.

Был Рөстәм Сәләхетдиновтың иҫәбендә дүртенсе гуманитар миссия. Ул ирекмәнлек эшенән тыш, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙырға ла өлгөрә. Киләсәктә ғалим булырға һәм, әлбиттә, кешеләргә ярҙам итергә, еңеүҙе яҡынайтырға теләй.

- Уҙған йылдың декабрендә Мариуполь халҡына йорттарын тергеҙергә ярҙамлаштым. Дондағы Ростовта гуманитар ылау йыйып, Луганскиға яугирҙарға оҙаттыҡ. Ә Орск ҡалаһында логистик үҙәк булдырҙыҡ, һыу баҫыуҙан зыян күреүселәргә ярҙам ташыныҡ, - тип командировкаларын иҫкә алды ирекмән. - Әлеге эш сәфәрендә иң иҫтә ҡалғаны шул булғандыр: госпиталдә бер яугир әсәһенә иҫән икәнлеген хәбәр итеү өсөн телефонымды һорап торҙо. Тағы бер аҙҙан ҡатынына имен-һау ҡайтырға вәғәҙә бирҙе. Шундай мәлдәрҙә үҙеңдең эшеңдең ни тиклем мөһим икәнлеген аңлайһың...

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

### УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун туғыҙынсы хат: "Нисек һөләшергә?"

Телдәге тупаҫлыҡ менән көпәренеү, үҙ-үҙендә тупаҫ тотоу, кейемдәге бөхтәһеҙлек менән маһайыу кеүек үк, - киң таралған күренеш, һәм был, дөйөм алғанда, кешенең психологик яҡтан яҡлауһыҙ булыуы, уның көсһеҙлеге тураһында һөйләй. Былай һөйләшкән кеше тупаҫ шаяртыу, киҫкен һүҙ, ирония, әҙәпһеҙлек аша үҙендәге ҡурҡыу, шөрләү, хәүефләнеү тойғоһон баҫырға тырыша. Нәҡ ихтыяр көсө булмаған уҡыусылар уҡытыусыларҙан ҡурҡмауын күрһәтергә теләп, уларға тупаҫ ҡушамат таға. Был ярым аңлы рәүештә килеп сыға. Был тәрбиәһеҙлек, интеллигентһыҙлыҡ, ҡайсаҡ хатта ауыһыҙлыҡ билдәһе булыуы тураһында әйтеп тә тормайым. Әммә көндәлек тормоштағы теге йәки был күренештәр тураһында тупаҫ, әҙәпһеҙ, вайымһыҙ ирония менән һөйләүҙең нигеҙендә лә шул уҡ сәбәп йәшеренгән, тимәк, был осраҡ йәрәхәт ҡалдырған. Былың менән был кешеләр үҙҙәре ҡурҡҡан күренештәрҙән өҫтөнөрәк тороуҙарын күрһәтергә маташа. Барлыҡ жаргон һәм әҙәпһеҙ һүҙҙәр нигеҙендә көсһеҙлөк ята. "Һүҙҙәр менән төкөрөнгән" кешеләр шул рәүешле тормошта үҙҙәрен борсоған, ғазаплаған, тулҡынландырған, яҡлауһыҙ һәм көсһөҙ итеп тойорға мәжбүр иткән, тәрән йәрәхәт ҡалдырған күренештәрҙе һанға һуҡмауын сағылдыра.

Ысын мәғәнәһендә көслө һәм сәләмәт, тотороҡло кеше кәрәкмәгәндә ҡысҡырып һөйләшмәй, ирешмәй һәм жаргон һүҙҙәрҙе ҡулланмай. Сөнки ул уның һүҙҙәре былай ҙа әһәмиәтле булыуын аңлай.

Телебеҙ - тормошта үҙебеҙҙе тотошобоҙҙоң мөһим бер өлөшө. Һәм кеше нисек һөйләшеүенә ҡарап, тиҙ генә кем менән эш итеүебеҙҙе төшөнәбеҙ: кешенең интеллигентлыҡ кимәлен, уның психологик һапалығын, "комплекслылыҡ" кимәлен билдәләй алабыҙ.

Яҡшы, тыныс, интеллигентлы телмәрҙе оҙаҡ һәм иғтибарлы өйрәнергә кәрәк - ҡолаҡ һалырға, күрергә, уҡырға һәм өйрәнергә. Ҡыйын булһа ла, был кәрәк. Телмәребеҙ - үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙҙоң мөһим өлөшө булыуҙан тыш, шәхесебеҙҙең, күңелебеҙҙең, аҡылыбыҙҙың, мөхит үҙенә "упканда" уның йоғонтоһона бирелмәй торған һәләтебеҙҙең бер өлөшө лә.

## Егерменсе хат: "Нисек сығыш яһарға?"

Йәмәғәт алдында телмәр тотоу тормошобоҙҙа ҡәҙимге күренеш хәҙер. Һәр кемгә йыйылыштарҙа, бәлки, хатта лекция һәм докладтар менән сығыш яһай белеү кәрәк.

Ораторҙар һәм лекторҙар оҫталығы тураһында бөтә быуаттарҙа ла меңәрләгән китаптар яҙылған. Бында телмәр тотоу оҫталығы тураһында билдәле булған барыһын да ҡабатлап тороу кәрәкмәҫ. Тик бер генә ябай фекерҙе әйтәм: сығыш ҡыҙыҡлы булһын өсөн, сығыш яһаусының үҙенә был ҡыҙыҡлы булырға тейеш. Уға үҙ ҡарашын еткереү, быға инандырыу ҡыҙыҡлы булырға, лекция материалы үҙенә оҡшарға, хатта йәлеп итергә тейеш. Сығыш яһаусы үҙе һөйләгән нәмә менән ҡыҙыҡһынырға һәм ошоно тыңлаусыларға еткерергә, тойорға ярҙам итергә бурыслы. Шул саҡта ғына уны тыңлауы ҡыҙыҡ буласаҡ.

Һәм тағы: сығышта бер тигеҙ бер нисә фекер, идея булырға тейеш түгел. Һәр хәлдә, унда башҡаларын үҙенә буйһондорорлоҡ бер өҫтөнлөклө идея булһын. Шул саҡта сығыш ҡыҙыҡһындырыу ғына түгел, оҙаҡҡа иҫтә ҡаласаҡ.

Асылда иһә, һәр ваҡыт яҡшылыҡ менән сығыш яһағыҙ. Хатта берәй идеяға, фекергә ҡаршы булғанда ла, һеҙҙең менән бәхәсләшеүсенең әйткәндәрендә яҡшы яҡтарҙы күтәрмәләгән кеүек итеп сығыш яһағыҙ. Йәмәғәт алдында сығыш яһау гел йәмәғәт кәүҙлегенән килергә тейеш. Шул саҡта ул хуплау табасаҡ.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

лай. Йыл һайын һәр өлкән кеше уртаса алғанда ОРВИ, шул иҫәптән грипп менән 2-4, ә балалар 6-9 тапҡырға тиклем ауырыуы ихтимал. Күпселек кеше сир билдәләрен медицина ярҙамына мөрәжәғәт итмәйенсә, йөрөп үткәрә. Ләкин был сирҙең ҡатмарланып китеү ихтималлығын онотоорға ярамай һәм уға етди ҡараштa булыу кәрәк. ОРВИ-ның инкубация осоро 1-14 көн, билдәләре яҡшы таныш: тымау,тамаҡ ауыртыу, йүтәл. Сирләләр йыш ҡына хәлһеҙлеккә, тән температураһы күтәрелеүгә зарлана. Әлеге ҡатмарлыҡтар башланып китмәҫ борон дауалау саралары күреү кәрәк һәм прививка эшләтеүҙән дә баш тартыу ярамаҫ ине. Милли календарь буйынса табиптар балаларға - туберкулез, В гепатиты, пневмококлы инфекция, коклюш, дифтерия, столбняк, полиомиелит, ҡыҙылса, ҡыҙамыҡ, паротит һәм өҫтәлмә рәүештә - грипҡа ҡаршы, һыу сәсәге, А гепатиты, менингококк инфекцияһынан прививкалар эшләтергә кәңәш бирә. Грипттың айырыуса балалар һәм өлкәндәр, йөклө ҡатындар, иммунитеты көсһөҙ булған кешеләр өсөн хәүефле икәнен онотмағыҙ. Вакцина дауаханаға ятып дауаланыуҙарҙы һәм үлем осраҡтарын кәметә.

### Менингококлы менингит

Был сир менингококк инфекцияһының бер төрө һәм ул баш мейеһе ярыһының эренләп елһенеүен аңлата. Хәүефле сир менингококк бактерияһы менән зарарланыуҙан башлана. Был бактерия танау-йотҡолоҡ юлдарынан эләгә һәм шунда үрсей, артабан уның ҡанға таралыуы ихтимал. Ул инде бактериемия тип атала. Был инфекцияның йәшен тиҙлегендә таралыуын билдәләйҙәр. Уның билдәләре һалҡын тейгәндәгенә лә, ағыуланыу билдәләренә лә оҡшаш була, ләкин ул бик тиҙ көсәйә һәм тәүлек эсендә сирлене теге донъяға алып китеүе мөмкин.

Менингококк менингиты бик киҫкен башлана: тән ҡалтырай, температура 38-40-ҡа тиклем күтәрелә. Сирлеләр баш ауыртыуға зарлана, ҡоҫа. Менингиттың бик хәүефле сир булыуын иҫтә тотоп, кисекмәҫтән медицина ярҙамына мөрәжәғәт итергә кәрәк, сөнки пациент тәүлек әйләнәһенә табип күҙәтеүе аҫтында булырға тейеш. Был сир һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең иң көнүҙәк мәсьәләләренең береһе, ул илдәге иң ауыр инфекция иҫәпләнә. Унан үлем осраҡтары 16 процент тәшкил итә. Уны иҫкәртеү өсөн 5 йәшкә тиклемге балалар ала торған прививкаларға өҫтәп, Милли календарға ярашлы, менингококк инфекцияһына ҡаршы ла вакцина эшләтергә кәрәк. Ул балаға 9 айлыҡ сағынан уҡ эшләнергә мөмкин һәм ул менингококтың 4 төрөнән һаҡлай.

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһе белгестәре вакциналауҙы вирустарҙан һаҡланыуҙың ышаныслы сараһы тип раҫлай, сөнки ул сирләүҙе иҫкәртеп кенә ҡалмай, ә коллектив иммунитет булдырыуға ла булышлыҡ итә, ә был иһә көҙгө-ҡышҡы инфекциялар осоронда бик мөһим.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**



## 18 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап IV. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.20, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Противостояние". [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус.Яз). [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.15 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Прости меня". [12+]**
**4.30 Телецентр. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Противостояние". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Специальный репортаж. [12+]**
**20.45 Мы. [12+]**
**21.15 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]**
**4.15 Мама. [12+]**

## 20 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Противостояние". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Сумерки". [12+]**
**3.45 Мегасело. [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 21 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера года. "Противостояние". [16+]
0.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 22.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.50 Хоккей. "Лада" (Тольятти) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**2.30 Спектакль "Ғилмияза". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**

## 22 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.35 "АнтиФейк". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети" - это фантастика!" [0+]
23.25 Спецпроект. "30 лет вместе". "Последний герой". [12+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Райский". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
0.20 "Истории Большой Страны". [12+]
1.20 Х/ф "Бариста". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 4.30 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Голубушки мои". [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 23 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Алексей Гуськов. Противостояние звезд". [12+]
11.05 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё". [12+]
13.05 "ПроУют". [0+]
13.55 Спецпроект. "30 лет вместе". "Телевидение изнутри". [16+]
15.45 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап V. [0+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [0+]
20.10 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Премьера. "Большая разница". [16+]
22.45 Х/ф Премьера. "Черный ящик". [12+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Рецепт счастья". [16+]
0.30 Х/ф "Повезёт в любви". [16+]
4.05 Х/ф "Осколки хрустальной туфельки". [12+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Бренды Башкортостана. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]**
**3.15 Спектакль "Ғәлиәбаныу". [12+]**
**5.15 Әлләсе... [12+]**

## 24 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.40 Д/ф "Аркадий Райкин. Человек с тысячью лиц". [12+]
14.40 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [0+]
16.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап V. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 Д/ф "Кто такой этот Кустурица?". К 70-летию режиссера". [16+]

### РОССИЯ 1
6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.30 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юморина-2024". [16+]
17.00, 19.00 "Песни от всей души". [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.40 Х/ф "Вальс-Бостон". [12+]
3.21 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15, 16.15, 4.30 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.30 Концерт "Оҙон көй". [12+]**
**18.30 Мегасело. [12+]**
**19.15 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.30 Розыгрыш от ТЦ "Радуга".**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**22.30, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Бенефис народной артистки РБ Альфии Каримовой. [12+]**
**1.00 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**2.30 Ете егет. [12+]**
**3.30 Колесо времени. [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (16) дүшәмбе | 7:08 | 8:55 | 13:30 | 15:20 | 17:06 | 18:54 |
| 19 (17) шишәмбе | 7:10 | 8:57 | 13:30 | 15:19 | 17:05 | 18:53 |
| 20 (18) шаршамбы | 7:11 | 8:59 | 13:30 | 15:17 | 17:03 | 18:52 |
| 21 (19) кесе йома | 7:13 | 9:01 | 13:30 | 15:16 | 17:02 | 18:51 |
| 22 (20) йома | 7:15 | 9:03 | 13:30 | 15:15 | 17:01 | 18:50 |
| 23 (21) шәмбе | 7:16 | 9:04 | 13:30 | 15:14 | 16:59 | 18:48 |
| 24 (22) йәкшәмбе | 7:18 | 9:06 | 13:30 | 15:13 | 16:58 | 18:47 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Холоҡта ла, үҙ-үҙеңде тотошта ла, кейемдә лә иң гүзәле - ул ябайлыҡ.*
*(Генри Лонгфелло).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 19 НОЯБРЬ - ХАЛЫҠ-АРА ИРҘӘР КӨНӨ

**Был байрам көнө ғаиләлә һәм йәмғиәттә ир-егеттәрҙең ыңғай ролен һыҙыҡ аҫтына алыу маҡсатында йыл һайын билдәләнә. Беренсе тапҡыр уны 1999 йылда Кариб диңгеҙенең көнъяҡ өлөшөндәге утрау-дәүләттәр - Тринидад һәм Тобаго республикалары халҡы байрам итә.**

Артабан Кариб бассейнына ҡараған башҡа илдәрҙә, Австралия, Төньяҡ Америка, Азия, Европала һәм БМО илдәрендә күтәрмәләп алалар. Бөгөн Халыҡ-ара ир-егеттәр көнө 60-тан ашыу илдә билдәләнә.

Әлбиттә, көслө заттарға бағышланған айырым байрам көнөн булдырыу идеяһы күптән йәшәгән, шулай ҙа Вест-Индия университеты докторы Джероме Тилуксингх тәҡдим итмәйенсә, аныҡ ниндәйҙер саралар күрелмәгән. Ә 19 ноябрь тап ошо докторҙың атаһының тыуған көнө икән.

Халыҡ-ара ир-егеттәр көнөнөң төп маҡсаты - көслө заттарҙың ғаиләлә һәм балалар тәрбиәһендә әһәмиәтен билдәләгәндә уларҙы гендерға ҡарап ҡыйырһытыуҙарға иғтибар йәлеп итеү, тип билдәләнә. Шулай уҡ ир балаларҙың һаулығын һаҡлау, ысын ир-егет итеп тәрбиәләү мөһимлеген дә алға һөрә ойоштороусылар.

Бына шундай байрам көнө бар донъяла, ә беҙ был айҡанлы башватҡыста йөр һүҙле шағирҙарыбыҙҙың ир-егеттәр асылына арналған шиғырҙарын уҡып, был юлдарҙың авторҙарын табып ҡарайыҡ һәм тормош иптәштәребеҙгә, атайҙарға, олатайҙарға, ағай-энеләребеҙгә тағы бер тапҡыр хөрмәтебеҙҙе, яратыуыбыҙҙы, таяныуыбыҙҙы белдереп алайыҡ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**44-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ренат. Һупайлы. Көрәгә. Зәргәр. Бонус. Март. Нәркәс. Шәре. Шик. Әй. Фа. Әләм. Һинд. Әтәс. Илиада. Абруй. Тағун. Еме. Әсә. Арҡау. Әбеш. Әйшә.

**Вертикаль буйынса:** Биишева. Кендектәр. Сәтәкәй. Һитә. Етегән. Гимн. Елпәҙә. Стела. Шаһ. Рәшә. Матдә. Ғарҡ. Түләк. Алыш. Зәйнетдин. Ру. Әсирә. Грек. Рәссамдар.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**21 ноябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+
**22 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**23 ноябрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+
**24 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 ноябрь "Путешествие в театр кукол"**, экскурсия, БР-ҙың һәм РФ-ның халыҡ артисы Айрат Әхмәтшиндың оҫталыҡ дәресе. 18.00 0+
**21 ноябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 18.00 0+
**22 ноябрь "Удивительное путешествие во времени"**, (В. Щербакова), иммерсив спектакль. 12+
**23 ноябрь "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 15.00 0+
**24 ноябрь "Два кота"** (О. Штырляева). 14.00 0+
**"Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 ноябрь "Столетняя история Мосфильма"**, киноконцерт. 6+
**21 ноябрь "Модерн: XX быуат"** концерт. 6+
**23 ноябрь "Музыкаль интерактив"**, 4-7 йәшлектәр өсөн. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22 ноябрь "Йөрәк майым"** (Б. Абдуразаков), мелодрама. 16+
**23 ноябрь "Золотой цыпленок"** (В. Орлов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20, 21, 22 ноябрь Премьера! "Вариҫ"** (В. Жеребцов), драма. 13.00, 16.00, 18.00 12+
**21 ноябрь "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедияһы менән Баймаҡ халыҡ ижады үҙәгендә. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 ноябрь "Когда душа поет"** Айгиз Уйылдановтың концерты. 6+
**22 ноябрь "Премьера! "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәнһүҙин), музыкаль комедия. 12+
**24 ноябрь "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+
**"Хушығыҙ, хыялдарым!"** (Ә. Атнабаев), драма. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**19 ноябрь "Геология. Күреү сәнғәте"** фотокүргәҙмәһе асыла. 14.00 0+
**21 ноябрь "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"** фильмы күрһәтелә. 14.00 6+
**22 ноябрь "Әсәйҙәр көнө"**, акция. 11.00 0+
**23 ноябрь "Закир Рәмиев. Шәфҡәт күрһәтеүсе, алтын приискыһы хужаһы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре"**, автор экскурсияһы. 14.00 12+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТАҒЫ СИБАЙҘАР КИЛӘ

**Сибай концерт-театр берекмәһе 31-се ижад миҙгелен мәңгелек йырҙар авторы, яраткан легендар композиторыбыҙ Рим Хәсәновтың үлемһеҙ йырҙарынан торған шәп концерт менән асҡайны. Был концертты иң беренселәрҙән булып Баймаҡ, Өфө ҡалалары, Ейәнсура районының Исәнгол ауылы халҡы ҡарап ҡыуанһа, 28 ноябрҙә Кушнаренко, 29 ноябрҙә Дүртөйләлә тәҡдим ителәсәк.**



Яңы миҙгелде мәҙәниәт усағы ҙур уңыштар, ижади күтәренкелек менән башлап ебәрҙе. Миҙгелде асыр алдынан берекмәлә бер төркөм һәләтле йәштәр эш башланы. Мира Харрасова, мәҫәлән, коллективҡа быйыл ҡыш уҡ ҡушылды. Ул - Сибай ҡыҙы. Бәләкәй генә сағынан Балалар сәнғәт мәктәбендә вокал менән шөғөлләнгән. 16 йәшендә "Ирәндек моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың төбәк-ара йыр бәйгеһендә балалар араһында гран-приға өлгәшкән. Бынан тыш, Мира республика һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге "Эстрада йыры", "Классик вокал", ҡалала үткәрелгән "Голос" шоу-проекты номинацияларында еңеү яулаған.

Коллективта эш башлаған Әбйәлил егете Йәмил Ғайсин быйыл Сибай сәнғәт колледжын тамамлаған. Ул республика, Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдәрҙәге йыр бәйгеләре лауреты, былтыр Асҡар Абдразаҡовтың вокал сәнғәте Академияһы проектында ҡатнашып, үҙ көсөн һынап ҡараған. Ҡалала уҙғарылған "Голос" шоу-проекты номинацияһында еңеү яулаған. Йырсы академик, эстрада, халыҡ йырҙарын да бер тигеҙ оҫта йырлай. Вокалдан тыш, Йәмил гитарала һәм фортепианола уйнай, мәҙәни саралары алып барыусы нәфис һүҙ оҫтаһы ла.

Тағы бер сағыу тауышлы йырсы Яна Ильясова ла берекмәлә эш башланы. Ул тәүге тапҡыр ҡаланың үҙәк майҙанындағы сәхнәлә балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе булған саҡта сығыш яһай. Шунда ул үҙенә һоҡланып ҡараған тамашасыларҙың ҡарашын тоя һәм йырсы булырға ҡарар итә. Артабан Балалар музыка мәктәбенә бара. Ҡыҙ тәүге тапҡыр ошонда донъя классикаһы менән таныша. Артабан Силәбелә Чайковский исемендәге Көньяҡ Урал институтын тамамлай. Магнитогорск, Силәбе ҡалаларының опера һәм балет театрында эшләп, тәжрибә тупларға ла өлгәрә. Күңеле тыуған ягына тартылғас, ҡыҙ Сибайға ҡайтырға ҡарар итә.

Тағы бер көслө тауышлы артист-вокалист Азамат Әхмәтханов 1998 йылда Учалы ҡалаһында тыуған. Учалыла С.Низаметдинов исемендәге Сәнғәт колледжын тамамлағас, Ростроповичтар исемендәге Ырымбур дәүләт сәнғәт институтында юғары белем алған. "Ике уҡыу йортонда ла игеҙәгем Азат Әхмәтханов менән бергә уҡыныҡ", - ти йырсы. Институтта уҡығанда уҡ егеттәр Учалы филармонияһында эшләп тә йөрөй. Игеҙәктәрҙең икеһенең дә тауышы сағыу. Улар бергә Өфөлә лә, башҡа ҡалалар сәхнәһендә лә сығыш яһаған. "Әлеге ваҡытта Азат Санкт-Петербурга шәхси мәктәптә балалар уҡыта. Ә мин Башҡортостанда ҡалып, карьера эшләргә булдым",- ти Азамат.

- Йырсыларҙан тыш, оркестрға артистар алдыҡ. Быйыл Сибай сәнғәт колледжын тамамлаған Ева Ҡоҙаҡаева - саксофонда, Гөлнәзирә Сәфәрғәлиева - кларнетта, Гөлбикә Имелбаева - флейтала, Денис Фәтхуллин тубала уйнай. "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбленә Вилена Аралбаева һәм Ришат Сөләймәновтарҙың ғаилә пары ҡушылды. Шулай уҡ Йәнзилә Латипова исемле бейеүсе килде. "Сулпан" балалар театрында Эльвира Мөхәмәтшина актриса булып эш башланы. Юлиә Бәхтиева нәфис һүҙ оҫтаһы булараҡ, мәҙәни сараларҙы алып барасаҡ, - тип яңылыҡтар менән таныштырҙы Сибай концерт-театр берекмәһе директоры вазифаһын башҡарыусы Юнир Кәлимуллин.

Сибай артистары октябрҙә Өфөлә ике концерт ҡуйһа, ноябрҙә тағы баш ҡалаға юлланырға торалар. Быйылғы Һаулыҡ мөмкинлектәре сикле кешеләрҙе хәстәрләү йылында Сибай концерт-театр берекмәһе Азат Исҡужиндың "Күңел нурым ғаләм яҡтырта" исемле концертын әҙерләй. Ул Өфөлә 21 ноябрҙә уҙа.

- Һуңғы арала Сибай филармонияһы йырсылары өсөн арыуыҡ ҡына йырҙар яҙҙым. Уларҙы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ғаяз Ғәйетбаев, Йәғәфәр Нәҙершин, Сөмбөл Моратова, Азамат Әхмәтханов башҡара. Шулай уҡ Башҡортостандың халыҡ артистары Артур Туктағолов, Минзифа Исҡужина, йәшерәк йырсылар Алмас Хөсәйенов, Илһам Мөхәмәтшин, Сулпан Әбүбәкерова ла минең йырҙарҙы бик теләп башҡара, - ти композитор. - Әйткәндәй, Өфөлә концерт ҡуйырға берекмәбеҙҙең художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Әлмирә Ҡыуатова дәртләндерҙе. Сценарийҙы Гөлнур Ҡыуатова яҙҙы...

Рухи яҡтан көслө, күңел көҙе менән матурлыҡты тойоп, хистәрен йәнһыҙ итмәйенсә... 

Рухи яҡтан көслө, күңел күҙе менән матурлыҡты тойоп, хистәрен йән һалыусы Азат Исҡужиндың концерты һәр кемдең күңеләнә хуш килер, тип ышанабыҙ!

**Гөлдәр ҠАДАЕВА,**
**Сибай концерт-театр берекмәһенең әҙәби-реклама бүлеге етәксеһе.**

ТЕЛҺӨЙӘР

## УШАНДАҠТАР МЕНӘН АРАЛАШ

**Беҙ тотонған ҡалын-ҡалын китаптарҙа һүҙҙәр һалдаттар шикелле бик ҡаты тәртиптә теҙелгән. Араларында телдән төшмәгән һүҙҙәргә ушандаҡтары ла бихисап. Иң тәүҙә шул ушандаҡ менән танышайыҡ.**

**Ушандаҡ.** Алыҫ туғандар, сыбыҡ осо нәҫелдә "ушандаҡ" тигән бер һүҙ ҙә белдерә ала. *Әйтәйек: Тәрлә урында ушандаҡтар күп. Ушандаҡтар менән дә тығыҙ аралашабыҙ. Сит илдә лә ушандаҡ табылды.*

**Уша.** Мейестең ҡырынан сығып торған урыны шулай атала. *Мәҫәлән: Мейес ушаһына һөйәлеү. Өй кәрнизен дә уша тип йөрөтөү бар. Миҫал: Ушаны буяу. Йорт ушаһын семәрләп эшләгәндәр.*

**Үҙле.** Йәбешкәк, һуҙылыусан әйберҙең сифатын шулай атайҙар. *Мәҫәлән: Ҡамырҙы үҙле итеп баҫыу. Үҙле измә әҙерләү.*

**Үҙемсе.** Үҙен генә уйлаған, эгоист кеше үҙемсе була. *Миҫал: Үҙемсе холҡ. Баланы үҙемсе итеп тәрбиәләмә.*

**Үкел.** Ҡыйматлыҡ менән үкел бер үк мәғәнәгә эйә. *Миҫалға: Үкел ҡыҙ. Үкел ул. Үкел әсәй менән үкел атайҙы ҡунаҡҡа саҡырыу.*

**Шулай итеп, телмәребеҙгә тиҙерәк эйәләштереп, йыш ҡулланған лексиконға ушандаҡ һүҙҙәрҙе лә яҡын туған итәйек.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТӘКӘЛӘР ҺӨҘӨШКӘНДӘ...

### кәзәләр ял итә

- Этте иркәләтһәң - иренен ялар, түрәне иркәләтһәң - илен талар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

- Күп уйлау мөһим түгел, ә яратыуҙың күп булыуы мөһим, шуның өсөн һөйөү тыуҙыра торған нәмәләрҙе эшләгеҙ.

**(Тереза Авильская).**

- Тормош - ул сценарий тексына яҙылған оло бер мәрәкә.

**(Чарли Чаплин).**

- Ҡайһы саҡта тын һыуға ҙур балыҡ эләгеүе лә бар.

**(Халыҡ мәҡәле).**

- Иң ҙур еңеү - үҙ-үҙеңде еңеү ул.

**(Публилий Сир).**

- Холоҡта ла, үҙ-үҙеңде тотошта ла, кейемдә лә иң гүзәле - ул ябайлыҡ.

**(Генри Лонгфелло).**

- Йыһанда яуызлыҡ та, нәфрәт тә түгел, ә изгелеккә ихтыяр идара итә.

**(Поль Верлен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡарт бүре үҙе урынына өйөр башлығы һайларға уйлай. Иң ҡыйыу тип иҫәпләгән тоҡомдашы янына килә лә:**

**- Мин ҡартайҙым, һине өйөр башлығы итеп тәғәйенләргә уйлайым. Тик һин уға лайыҡлы икәнлегеңде иҫбатларға тейешһең. Бынын өсөн иң көслө бүреләрҙе ал да, барыһына ла етерлек аҙыҡ алып ҡайт, - тигән.**

**Яңы башлыҡ алты дуҫын ала ла һунарға китә. Кисен барыһы ла имен-аман, өйөрҙө туйындырырлыҡ ризыҡ менән ҡайта. Өйөр башлығы:**

**- Һөйлә әле, нисек итеп берегеҙ ҙә зыян күрмәй, өҫтәүенә, бөтәһенә лә етерлек табыш менән ҡайттығыҙ?**

**- Беҙгә һунарҙан ҡайтып килгән ун һунарсы осраны. Беҙ уларға һөжүм иттек, табыштарын тартып алдыҡ, - тип яуап бирә.**

**- Афарин, бик яҡшы. Иртәгә лә һунарға сығырһығыҙ, - тигән.**

**Яңы башлыҡ тағы теге алты дуҫын ала ла юлға сыға. Тик өйөр уларҙы кисен дә, иртәгәһен дә көтөп ала алмай. Яңы башлыҡ өсөнсө көнгә саҡ атлап яңғыҙы ғына әйләнеп ҡайта.**

**- Табыш эҙләп, урман эсенә индек. Ҡаршыбыҙға өс һунарсы осраны. Уларға һөжүм иттек, әммә улар беҙҙән көслөрәк булып сыҡты...**

**- Нисек инде? - тип аптырай Ҡарт бүре. - Тәүгеһендә һеҙ ун һунарсыны бик еңел еңдегеҙ, ә бынының өсүгә ҡаршы тора алмағанһығыҙ?**

**- Эйе. Тик тәүгеһендә һунарсылар ғына ине. Ә бынынһында - иң яҡшы өс дуҫ ине! - тип яуап биргән яңы башлыҡ".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24045

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 2007